**✓Беҙҙе мөмкинлектәр уратып алған, улар тиҙ генә барлыҡҡа килә һәм тиҙ генә юғала ла. Ул үҙенән һуң йә ҡыуаныу, йә үкенеү ҡалдыра. Шуға ла үҙеңдән аҡыллыраҡтарҙы тыңлау, балаңды тубығыңа алып иркәләү, яр буйлап яратҡан кешең менән йөрөү, яҡшы китап ҡиммәтен үҙеңә ҡабул итеү, кемгәлер яҡшы һүҙ әйтеү мөмкинлеген файҙаланып ҡалырға тырыш. Үҙеңде телевизорҙы һүндереп ҡуйырға һәм был ваҡытты ғаиләң менән һөйләшеүгә файҙаланырға мәжбүр ит.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан баһлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

**20-26 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2009 ЙЫЛ**

**№25 (339)**


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ауылдарҙы нисек һаҡларға,**

ҙурайтыппмы, бәләкәйләтепме?



2

**Берғамыт буйындағы һабантуй ҙа...**

һабантуйса булды



5

**Батыр даны - мәңгелек,**

йәки Салауат исеме эстон хәтерендә лә йәшәй



8-9

**Ғаиләнде дөрөҫ ҡора белһәң...**

камиллыҡҡа һәм Аллаһы ризалығына өлгәшерһең



13

**ТВ программа**

14


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ниндәй проблемалар ваҡытлы матбуғатта сағылыш тапмай?

***Халис КИЛДЕҒОШОВ, "Аҡбуҙат" ипподромының баш ветеринария табибы:***

- Ысын мәғәнәһендә халҡыбыҙ тарихын, уның аҫыл улдарын һәм ҡыҙҙарын күрһәтә алғаныбыҙ юҡ әле гәзиттәрҙә. Илебеҙҙә барған үҙгәрештәр, асылда, ауылдарыбыҙҙы юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән, журналистарыбыҙ был фактты ниңәлер урап үтергә тырыша. Хәҡиҡәт бит улар күрһә лә, күрмәһә лә, йәшәй бирә һәм ул хаҡта ябай халыҡ бик яҡшы белә. Ә ваҡытлы матбуғат иһә һаман да тормошобоҙҙо бер яҡлы ғына яҡтыртыуын дауам итә. Халыҡта был хәлде "ҡыуыҡ" тип атайҙар. Гәзит-журналдар күҙ алдына килтерергә тырышҡан тормош та шул ҡыуыҡҡа оҡшаған. Энә менән төртөүең генә бурыс - хәҙер ул ҡыуыҡ шартлаясаҡ. Ә бына бер көнлөк әртистәрҙән "йондоҙ" яһауға килгәндә, был тәңгәлдә беҙҙең ваҡытлы матбуғатҡа бер кем дә еткерә алмайҙыр. Бер тапҡыр ғына сәхнәгә сығып, булыр-булмаҫ тауышы менән һыңҡылдағандарҙың башҡорт сәнғәте менән бер ниндәй бәйләнеше юҡ, ә беҙҙең гәзит-журналдар шуларҙан "йондоҙҙар" штамплай. Закон нигеҙендә улар тураһында яҙыуҙы тыйырға кәрәк. Мин бына нисә йыл "Аҡбуҙат" ипподромында эшләйем, беҙҙә бер туҡтауһыҙ ярыштар булып тора, ә беҙҙең халыҡтың күңеленә үтә яҡын булған ошо донъя гәзит-журналдарҙа бөтөнләй яҡтыртылмай. Әле килеп халҡыбыҙҙың ерһеҙ тороп ҡалыу ҡурҡынысы килеп тыуҙы. Ә еребеҙҙе һаҡлау хаҡында гәзит-журналдарыбыҙ бөтөнләй өндәшмәй тиерлек...

***Хәтип ФАЗЫЛОВ, Башҡортостан Республикаһы Рәссамдар союзы рәйесе:***

-Ваҡытлы матбуғатта, минеңсә, милләттең күңеле, уйхистәре, проблемалары сағылырға тейештер. Ә беҙҙә күберәк рәсми материалдар баҫыла. Был хәл аңлашыла ла, гәзит-журналдар дәүләт органы булғас, рәсми материалдарҙан азат та була алмайҙыр. Әммә улар барыбер ҙә журналистың позицияһынан сығып баһаланырға тейештер, тип уйлайым. Юҡһа, беҙҙең гәзит-журналдарҙа бер ниндәй йөкмәтке, фекер һәлмәклеге булмаған, дөйөм һүҙҙәргә ҡоролған, дөрөҫөн әйткәндә, бер кемгә лә кәрәк булмаған һәм бер кем дә уҡымаҫлыҡ мәҡәләләр баҫыла. Былар барыһы ла журналистың позицияһы булмауын һөйләй. Беҙҙең рәссамдар ижадында был күренеш "халтура" тип атала. Әйткәндәй, гәзит-журналдарҙа беҙҙең рәссамдар хаҡында бик аҙ яҙыла.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

### ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ҒЫНА ТҮГЕЛ,

## тотош Рәсәйҙең батыры ул Салауат!

**Үткән аҙнала баш ҡалабыҙҙа бер түгел, өс байрам шаулап-гөрләп уҙып китте. Мин 12 июнде Рәсәй көнө, Ҡала көнөнән бигерәк, "Салауат йыйыны" үткәрелеүенә күрә, йөрәкһеп көткәйнем. Быға са был байрамды бер тапҡыр ҙа күрергә насип булманы. Шуға ла быйыл уның Өфөлә уҙғарылыуын шатланып ҡабул иттем, ни тиһәң дә, бөйөк батырыбыҙға арналған сарала яҡындан ҡатнашыу мөмкинлеге буласаҡ. Мин генә түгел, Өфөлә күптәр быға ҡыуанып бөтә алмағандыр. Һәйкәле тороуы ғына етмәй, тарихы һөйләнһен, шиғырҙары, ораны яңғыраһын әле батырыбыҙҙың баш ҡала майҙанында ла, тип уйланым.**



Байрам баш ҡаланың ете районының ете тирмәһен ҡарауҙан башланды. Тырышҡан райондар. Быға тиклем бындай сараларҙа беҙ гел генә райондарҙан килгән тирмәләрҙе күреп, уларҙағы боронғо йыһаздарға, ҡомартҡыларға иҫебеҙ китеп ҡарап һоҡланһаҡ, был юлы Өфө райондарының уларҙан ҡайтыш булмаған тырышлығына шаһит булдыҡ. Һәр береһе үҙ тирмәһен тейешенсә биҙәгән, һәр береһе үҙе белгәнсә программа әҙерләгән. Һәр береһе башҡорттоң ете ырыуының береһен һынландырған. Беҙ бигерәк тә юрматы ырыуын һынландырған Совет районы тирмәһе тирәһендә барған тамашаға һоҡланып ҡарап торҙоҡ. Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы уҡытыусылары һәм балалары **(һүрәттә)** ролгә инеп алғайны. Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы һәм башҡа ҡунаҡтар килеүгә, улар юрматы ырыуының оранын да, ағасын, ҡошон, батырын, ғалимын да ҡыҫҡырып һынаны ла сыҡты. Әйтеүҙәренсә, тирмәләр эргәһендә башҡарылған программаларҙы район хакимиәттәре үҙҙәре төҙөгән, йыһаздар йыйып, тирмәләрҙе лә үҙҙәре биҙәгән. Бынамын тигән программа килеп сыҡты.

**(Дауамы 4-се биттә.)**

**✓ 15-20 процентын интеллигенция вәкилдәре тәшкил иткән ауылда бындай кире күренештәр оятһыҙлыҡ, иманһыҙлыҡ, выжданһыҙлыҡ тип баһалана һәм ауыл ыңғай юҫыкта үҫеш ала.**



ҺҮҘ - ХАКИМИӘТ БАШЛЫҒЫНА

# АУЫЛДАРҘЫ НИСЕК ҺАҠЛАРҒА,

## ҙурайтыпмы, бәләкәйләтепме?



**Алдынғы илдәр тәжрибәһенән сыҡҡанда, дөйөм халыҡ нисбәтенең 20 проценты ауылдарҙа йәшәй. Беҙҙең Башҡортостанда дөйөм халыҡтың 40 проценты ауыл ерендә йәшәй. Был, бер яҡтан, бәхет, сөнки бынауындай иҡтисади көрсөк заманында халыҡтың йәшәргә урыны, ашарға ризығы бар. Көрсөк мәңгелек түгел һәм ауыл ерендә йәшәүселәрҙең һаны артабан нык кәмейәсәк. Беҙҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге түбән булыуы арҡаһында ғына ауыл халҡы нисбәте күберәк килеп сыға. Хәҙер Рәсәй крәҫтиәненең хеҙмәт етештереүсәнлеге, әйтәйек, Урта Азия крәҫтиәнекенән күпкә түбәнерәк. Әммә беҙ ауылда йәшәү формаһынан барыбер йәйләп ҡотолорға мәжбүр буласаҡбыҙ. Сәнәғәт үҙ нәүбәтендә барыбер урбанизация процесын тиҙләтеүгә булышлыҡ итәсәк.**

Икенсе мәсьәлә: ауылдар ниндәй булырға тейешле? Ҙурмы, бәләкәйме? Бына, мәҫәлән, беҙҙең Ауырғазы районында 142 ауыл иҫәпләнә. Ошо ауылдарҙың 33-ө ергә менсе йылдарҙа яңы колхоздар ойошоу нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Ана шул яһалма рәүештә барлыҡҡа килгән ауылдар әлеге көндә таралып, юҡҡа сыға башланы. Тимәк, кешеләрҙең үҙ-ара гармониялы мөнәсәбәте нигеҙендә барлыҡҡа килгән тамырлы ауылдарҙың ғына киләсәге барлығын аңлата был хәл. Тамыры тәрән булмаған ағасты ла бәләкәй генә дауыл төбө-тамыры менән ергә ауҙара һуға бит. Шуның кеүек. Шул уҡ ваҡытта беҙ сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү осоронда барлыҡҡа килгән эре совхоздарҙың да юҡҡа сығыуына шаһитбыҙ. Тәүҙә урыҫтар һәм башҡа милләт вәкилдәренән торған был ауылдарҙа хәҙер, асылда, аҫаба халыҡ йәшәй. Тәбиғәт кенә түгел, кешеләр араһындағы мөнәсәбәт тә яһалмалыҡты үҙ итмәй шул.

Нимә ул ауыл? Ике йорт булһа ла, ун йорт булһа ла, йөҙ йорт булһа ла, ул ауыл. Ҡыҫҡаһы, ауыл төшөнсәһе бик киң төшөнсә. Иң тәүҙә беҙгә аныҡлап алырға кәрәк: 50 йорттан торамы ул ауыл? 100 йорттанмы, 200 йорттанмы? Ошоларҙы уйлағанда, беҙгә барлыҡ ауылдарҙы ла һаҡлап ҡалыу мөмкин булмаясаҡ. Шул уҡ ваҡытта ауыл кешеләренең ҡалаларға китеп бөтөүгән теләмәһәк, ашығыс саралар ҙа күрергә бурыслыбыҙ. Хрущев ваҡытында перспективаһыҙ ауылдарҙы бергә ҡушып, эре ауылдар яһау сәйәсәте башланды. Әлбиттә, ул ваҡытта бындай ҡушыуҙарға ауылдар әле өлгөрмәгән булған.

Нимә генә тимә, кешене социаль стандарттарға яҡынайтырға кәрәк, барыбер ҙә. Биологик индивид булараҡ барлыҡҡа килгән кешенен, һәр урында йәшәгән кешеләр кеүек үк, социаль шарттарға, йәшәү уңайлыҡтарына хоҡуғы бар. Ә бөгөнгө ауыл кешеһе ана шундай социаль стандарттарҙан мәхрүм. Кәрәк ваҡытта ул дауаханаға, кәрәк ваҡытта аптекаға, кәрәк ваҡытта парикмахерскиға, төрлө тауарҙар һатылған магазиндарға бара алмай. Кәрәк икән, ауыл кешеһе туфли кейеп, урамдағы асфальттан үтергә тейеш, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ, кәрәк икән, макияж яһатырға, маникюр эшләтә алырға тейеш. Шулай булғас, беҙгә ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыр өсөн уларҙы бергә ҡушып ҙурайтыу һәм ҡаланыҡына яҡын булған социаль шарттар тыуҙырыу мөһим роль уйнаясаҡ. Социаль стандарттарҙы беҙ һәр ун йортло, һәр егерме йортло ауылға тәҙеп өлгәрә алмаясаҡбыҙ. Бик ҡиммәтҡә төшәсәк. Ауылдарҙы ҙурайтыуҙың ундағы мәктәптәрҙе һаҡлап ҡалыу өсөн дә ниндәй ҙур роль уйнағанын аңлауы ауыр түгел. Хәҙерге ваҡытта бик күп ауылдарҙағы мәктәптәр фәҡәт балалар һанының аҙ булыуы арҡаһында ябыла йә статусы үҙгәрә.

Әммә мине ауылдарҙы ҙурайтыуҙағы бер хәүеф барлығы ла борсой. Ауылдар кешеләр бер-береһен белмәҫлек хәлгә еткәнсе артыҡ ҙурайырға, ҡала рәүешен алырға тейеш түгелдәр. Нимә генә тимә, бәләкәйерәк ауылдарҙа бер зат, бер туғандар булған кешеләр йәшәй. Унда бер-береһен беләләр һәм тәртип тә була. Традициялар, йолалар ҡасан емерелә башлай, тип уйлайһығыҙ? Кешеләр бер-берен белмәгән, танымаған осраҡта. Совет осоро йәшәйешенең иң ҙур хатаһы ла шунда булды. Совхоздарға, ҡасабаларға, район үҙәктәренә, яңы тәҙәләш барған урындарға ҡырылмаһа ҡырҡ бала атаһын йыйып, телдәрен, йолаларын бутап бөтөрҙөләр. Әлбиттә, гидроэлектростанциялар, юлдар тәҙәлдә, әммә кешеләрҙең күмәкләп эшләүҙең лагерь системаһы төрлө милләттәрҙең менталитетын әҙәм ҡараһығыҙ сүрәткә еткерҙе. Әле лә беҙ ауылдарҙы нык ҙурайтып ебәрһәк, уларҙа ла халыҡтың матур йолалары һәм традициялары юғаласаҡ. Шул уҡ ваҡытта бәләкәй ауылдарҙың әкренләп юҡҡа сығыуына ла күҙ йомоп ултырып булмай. Тимәк, яңы барлыҡҡа килгән ауылдарҙың милли составын һәм уның һанын ныҡлы контроль аҫтына алырға тура киләсәк.

Мин йыш ҡына шул хаҡта ла уйланғаным бар: ауыл ҡасан һәм ниндәй маҡсатта барлыҡҡа килгән һуң? Минеңсә, ауыл бер туғандарҙың, бер затҡа, араға, ырыуға ҡараған кешеләрҙең ҡыйынлыҡтарға, дошманға ҡаршы бергәләп ҡаршы тороу маҡсатында барлыҡҡа килгәндер. Һәр хәлдә, башҡорт ауылының барлыҡҡа килеүендә ошо сәбәп ята. Тимәк, ауылдар мохтажлыҡтан сығып, органик рәүештә барлыҡҡа килгән икән, йәшәйештең был формаһынан беҙ баш тарта ла алмайбыҙ. Бөгөн ауыл милләтте ойоштороусы ысулды ла тәшкил итә.

Һүҙ юҡ, әлеге ваҡытта ауылда интеллигенция ҡатламы мотлаҡ рәүештә булырға тейеш. Әгәр ҙә бындай интеллектуаль ҡатлам булмаһа, ауылда ҡара көстәр хакимлыҡ итә башлай. Ауыл ерeнең интеллигенция ҡатламын кемдәр тәшкил итергә тейеш һуң? Уҡытыусылар, медицина хеҙмәткәре, почта работнигы, урмансы, ветфельдшер, мәсет муллаһы, мәәзин йә имам-хатиб, һатыусы, участка милиционеры, һ.б. Улар ауылда һигеҙ-туғыҙ кешене тәшкил итә икән, ирҙәре, ҡатындары балалары менән утыҙ-ҡырҡ кешегә барып етә. Ошо кешеләр, әйтәйек, ауыл халҡының 15-20 процентын тәшкил итһә, ауыл интеллектуаль яҡтан яҡлаулы һәм һаҡлаулы тигәнде аңлата булыр. Был көс ауылда таҙа шишмәнең ерҙе тишеп сығып ағып ятҡанын, шишмәнең ауыл халҡын яңы уйҙар, яңы ынтылыштар менән һуғарыуын хәтерләтер. Ошолар янында үҫкәнең тәрбиәһе, тәбиғи инсафлығы, аҡылы, йола, ғөрөф-ғәҙәт башҡарыуы менән башҡаларға өлгө булған бер ун кеше өҫтәлһә, ҡара көстәр бындай ауылда моронлай, баш төртә алмаясаҡ. Был хәлдә күп һынағаным бар: әгәр ҙә ауылда ошо интеллигенция ҡатламы булмаһа, ауылда эсеү, тартыу, хулиганлыҡ ҡылыу ҡәҙимгә тәртип нормаһына әүерелә башлай. Ә дөйөм ауыл халҡының 15-20 процентын интеллигенция вәкилдәре тәшкил иткән ауылда бындай кире күренештәр ояттһыҙлыҡ, иманһыҙлыҡ, выжданһыҙлыҡ тип баһалана һәм ауыл ыңғай юҫыкта үҫеш ала.

Беҙҙең милли менталитетты төрлө милләт вәкилдәре йәшәгән ҡатнаш ауылдар боҙа. Үкенескә ҡаршы, кеше бер ваҡытта ла сит милләт вәкиленең яҡшы ғәҙәттәрен, күркәм сифаттарын түгел, алама яҡтарын алырға, үҙләштерергә ынтыла. Был хәл тәбиғи һәм аңлашыла ла, сөнки икенсе милләт вәкиленең кире сифатынан һаҡланыу ысулы итеп кеше һәр ваҡыт шул кире сифат менән үҙе ҡоралланыусан. Сағыштырыу өсөн барыбыҙға таныш булған бер күренеште күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: урамда ике малай көҙәкләшеп, һуғышып китте икән, ти. Малайҙарҙың береһе тегеһенә көсө етмәгәс, ерҙә ятҡан ташты йә таяҡты ала һәм шуның менән һуғырға ынтыла. Шул уҡ ваҡытта икенсе малай ҙа унан һаҡланыр өсөн шундай уҡ һалҡын ҡоралдарға, ташҡа йә таяҡҡа үрелергә мәжбүр. Төрлө милләттәр йәшәгән ҡатнаш ауылдарҙа ла шул уҡ күренеш. Беҙ сыуаш ауылына барһаҡ, сыуашса һүгенергә өйрәнеп ҡайтабыҙ, ә сыуаштар үҙ нәүбәтендә беҙҙәнсә әрепләшергә-орошорға өйрәнә. Ә ниңә һуң беҙгә сыуаштың ҡаратырышлығын йә башҡа төрлө ыңғай сифатын алмаҫҡа һуң? Юҡ, беҙгә ул сифат кәрәкмәй, сыуашса һүгенә белһәк, уға ҡаршы һүгенеп өндәшә алһаҡ, еткән. Ғөмүмән, төрлө милләттәр йәшәгән ауылдарҙа бер-береһенән аламалыҡтарҙы өйрәнеп, үҙләштереп, ниндәйҙер субкультура хасил булған. Әгәр ҙә ауылдарҙы милли принцип буйынса айырыу мөмкин булмаған осраҡта, уларҙа барыбер ҙә 55-60 процент халыҡ бер төрлө милләттән торорға тейештер, тип уйлайым. Әгәр ҙә ошо нисбәт һаҡланмаһа, ауылда тәртип бер ҡасан да булмаясаҡ.

**Марат ИШЕМҒОЛОВ,**
**Ауырғазы районы хакимиәте башлығы.**

## Н И М Ә ? К А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Г. Рапота видеоконференция режимында Волга буйы федераль округы субъекттары башлыҡтары менән кәңәшмә үткәрҙе. Видеоконференцияла Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов та ҡатнашты. Сарала тәбәктә эш хаҡы түләү буйынса бурысты бөтөрөү проблемалары, хеҙмәт баҙарындағы хәл һәм ҡалаларҙың төп предприятиеларындағы эштәр торошо ҡаралды. Шулай уҡ мәктәптәрҙе, юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарын тамамлаусыларҙы эшкә урынлаштырыу мәсьәләләре лә тикшерелде.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Төмән өлкәһе Думаһы рәйесе С. Корепанов менән эш осрашыуы үткәрҙе. Осрашыу барышында Башҡортостан менән Төмән өлкәһе араһында ике яҡлы хеҙмәттәшлекте үҫтереү һәм нығытыу мәсьәләләре ҡаралды.

✓Башҡортостанда быйыл 94 йәйге лагерь эшләйәсәк. Әлегә асылған 60 лагерҙа республиканан 9,5 мең бала ял итә. Ҡалған 34-е ай аҙағына тиклем асыласаҡ. Йәй буйына 6 йәштән 15 йәшкә тиклем барлығы 400 мең баланың ялы ойоштороласаҡ.

✓Башҡортостан Журналистар союзының XVII сираттан тыш съезы булып үтте. Унда БР Журналистар Союзының яңыртылған уставы тикшерелде һәм раҫланды.

✓Көньяҡ Кореяның Сеул ҡалаһында уҙғарылған кунг-фу буйынса донъя кубогында Сибай ҡалаһынан 16 йәшлек Иҙел Ураҙгилдин уңышлы сығыш яһап, донъя чемпионы исеменә лайыҡ булды. Иҙел спорттың был төрө менән 11 йыл шөғөлләнә, быға тиклем ул Башҡортостандың һәм Волга буйы федераль округының күп тапҡыр чемпионы, Мәскәүҙә уҙған "Русский дракон" халыҡ-ара бәйгеһенең еңеүсеһе булған.

✓РФ Ҡораллы Көстәр сафына яҙғы саҡырыу ваҡытында Башҡортостандан 10900 самаһы егет саҡырылырға тейеш. Әле егеттәрҙең 6,5 меңе - 60 проценты армияға оҙатылған да инде. Саҡырыу дауам итә.

*✓ Кавказ халыҡтары менталитетын башҡорттоҡо менән сағыштырып буламы икән? Халҡыбыҙҙың толерантлығы арҡаһында ғына бөгөн Рәсәйҙең сәйәси картаһында икенсе "Чечня" ҡупмағанын Мәскәүҙә аңлайҙар микән?*

АҘНА ШАҢДАУЫ

# КАВКАЗ ТӨЙӨНӨН КЕМ СИСЕР ИКӘН?

## Путин да килде бында, Медведев та...

**Әйтмәйбеҙ генә. Ә Кавказда бөгөн һуғыш бара. Күрмәйбеҙ генә. Ә Ҡаф тауҙарында көн дә ҡан ҡойола. Иғлан ителгән һуғыш түгел. "Һуғыш башланды!" тигән бер генә документ та юҡ. Чечендар ҙа, ингуштар ҙа, Дағстан һәм Ҡабарда-Балҡар республикалары халыҡтары ла тыныс тормошта йәшәй һымаҡ. Асылда иһә, бөтәбеҙ ҙә күҙ алдында торған ҡурҡынысты күрергә теләмәйбеҙ. Башын ҡомға тыҡҡан дөйәғош хәлендәбеҙ. Һуғыш түгел дә баһа, тимәксеһегеҙме? Көн һайын бер нисә кешене үлтереү, йорттарҙы яндырыу, ҡала һәм ауыл урамдарындағы ҡораллы кешеләр, хәрби машиналар, танкылар - һуғыш түгелме ни? Йә, әйтегеҙсе?**

Кавказ бөгөн - бысҡып ятҡан оло усаҡ. Күмерҙәре ҡыҙыу көл аҫтында. Өҫтән кипкән утын ташлаһаң, тоҡанып китергә әҙер генә ята. Чечнянан башҡа. Унда тыныс. Тыныс һымаҡ. Тәү ҡарашҡа. Федераль ваҡытлы матбуғат саралары беҙҙең өсөн булдырған матур һүрәтләмәгә ҡарағанда, Рамзан Ҡадыров биләмәләрендә ут та юҡ, сурт та юҡ. Тып-тыныс. Федераль ҡаҙнанан миллиардлап аҡса килә. Ҡалалар яңынан төҙөлә. Мәсеттәр манараларын күтәрә. Юлдар һалына. Боевиктар тыныс тормошҡа ҡайта. Ундағы тыныслыҡ башҡа Кавказ республикаларында булған терактҭар, атыш һәм үлтереш фонында үтә шомло күренә. Гүйә, Чечня ниндәйҙер оло ҡан ҡойош алдынан тымып ҡалған кеүек тойола. Ә Дағстанда, Ингушетияла, Ҡабарда-Балҡар республикаһында иһә хәлдәр бөгөн мөшкөл. Көн һайын бер нисә мәйет. Ябай кешеләр түгел. Унда юғары урындар биләгәндәрҙе, судьяларҙы, милиционерҙарҙы үлтерәләр.

Федераль ваҡытлы матбуғат саралары беҙгә көн дә тиерлек раҫлап тора - Кавказда һуғыш юҡ. Айырым террористик элементтар айырым кешеләрҙең ғүмерен ҡыя. Айырым милиция подразделениелары ҡайһы бер ҡоралды кешеләрҙе юҡ итәбеҙ, тип, айырым ҡала һәм ҡасабаларҙың айырым йорттарын ер менән тигеҙләй. Ә дөйөм алғанда, Дағстанда - тыныслыҡ, Ингушетияла - именлек.

Президент Дмитрий Медведев үҙе барҙы Дағстанға. Хәрби форма кейеп тороп. Ҡулына автомат тотоп ҡына. Уның фотолары Рәсәй матбуғат сараларын урап сыҡты. Тик, нишләптер, түрәбеҙҙең был ишараһы (йәнәһе, беҙ көслөбөҙ, ҡоралыбыҙ етерлек, боевиктарҙы барыбер еңәсәкбеҙ) ышандырманы. Уның хәрби кеше түгел икәнлеге күренеп тора. Был, беренсенән. Ә, икенсенән, Дмитрий Анатольевич Кавказдағы проблемаларҙы автомат ярҙамында ғына еңеп булмағанлығын яҡшы аңлайҙыр, тигән өмөттәмен. Кавказ проблемалары кисә йәки бөгөн генә килеп тыумаған. Һәм уларҙы бер һелтәүҙә генә, Иосиф Виссарионович Сталин кеүек, "хыянатсы" халыҡтарҙы тыуған ерҙәренән Ҡаҙағстанға һәм Себергә һөрөү менән хәл итеп булмай. Кавказды ер менән тигеҙләп булмаған кеүек үк.

Ғөмүмән, Кавказ халыҡтары менталитетын, әйтәйек, башҡорттоҡо менән сағыштырып буламы икән? Халҡыбыҙҙың толерантлығы (киң күңеллелеге, ихласлығы, ҡунаҡсыллығы) арҡаһында ғына бөгөн Рәсәйҙең сәйәси картаһында икенсе "Чечня" ҡупмағанын Мәскәүҙә аңлайҙар микән?

Хәйер, төп теманан ситләшмәйек әле. Дағстан хаҡында һүҙебеҙ. 2,7 миллион кеше йәшәй бында. Ауыл халҡы күберәк - 60 процент самаһы. Халыҡтың 96 проценты - мосолмандар. Бала табыу йәһәтенән Дағстан ҡатын-ҡыҙҙары Рәсәйҙә өсөнсө урында тора. Ингушетиянан һәм Чечнянан саҡ ҡына ҡалышалар. Дағстан бөгөн иң күп милләтле республика һанала. Иң эре милли төркөм - аварҙар (30 процент самаһы), дарғындар (16 процент), ҡумыҡтар (14 процент) һәм лезгиндар (13 процент). Уларҙан тыш, бында тағы 100-ҙән ашыу милләт вәкиле йәшәй - лаҡтар, урыҫтар, әзербайжандар, табарасандар, чечендар, рутулдар, нуғайҙар, ағулдар, цахурҙар, әрмәндәр, татарҙар, таттар, украиндар, йәһүдтәр, тау йәһүдтәре, һәм тағы ла һандары мең кешегә лә етмәгән ваҡ ҡына милләттәр. Улар бер-береһе менән сәйәси, иҡтисади, ер, дин, туған-тумасалыҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ мөнәсәбәттәре менән айырылмаҫлыҡ итеп бәйләнгән. Шул уҡ ваҡытта уларҙың һәр береһенең тиерлек башҡа милләттәргә ҡарата булған талаптары бар. Ҡан-ҡәрҙәшлектән тыш, ҡон ҡайтарыу, үс алыу кеүек нәмә лә бар бит әле Кавказда. Традициялар үтә көслө булған был төбәктә бер нисә йөҙ йыл элек булған ваҡиғалар һаман халыҡ хәтерендә һаҡлана һәм быуындан-быуынға тапшырылып килә. Тауҙарҙа шаңдау оҙаҡ яңғырай, тип яҙып сыҡтылар ваҡытында беҙҙә. Осетин-ингуш конфликты уңайы менән тыуғайны ул һүҙ. Асылда иһә, башҡорттоң тапҡыр бер әйтеме булараҡ, бөгөн уны бөтә Кавказ тауҙарына ҡарата әйтергә булыр ине. Эйе, Ҡаф тауҙарында береһе-береһенә дуҫ, туған һәм ағай-эне. Шул уҡ ваҡытта унда һәр бер кеше күршеһен боғаҙынан алырға әҙер. Дин, тел, милләт өсөн генә түгел. Ер өсөн дә, мәсәләнән. Унда милли проблемалар иҡтисади мәсьәләләр менән бик тығыҙ бәйле.

Кавказ төйөнөн сисер өсөн бик ябай ысулды ҡулланырға мөмкин. Уны Рәсәй етәкселәренән ҡулланып ҡарамаған кеше булманы, шикелле. Сталин Кавказды ҡырмыҫҡа иләүе ише күрҙе - таяҡ тығып болғаны ла болғаны. Үҙе үк "енәйәтсе" тип атаған халыҡтарҙы һөргөнгә оҙатты. Шунда сереп юҡҡа сығырҙар, тип өмөт иткәйне. Өмөтө аҡланманы. Чечендар ҙа, ингуштар ҙа, балҡарҙар ҙа, ҡумыҡтар ҙа әйләнеп ҡайтты. Тик бында уларҙы берәү ҙә көтмәй ине инде. Хрущевтың ярты-йорто ҡарарының эҙемтәләре бик оҙаҡ уңалмаҫ яра булып торҙо. Ельцин да бындағы төйөндө сисә алманы.

Бөгөн Кавказ төйөнөн яңы Рәсәй етәкселегә сисергә маташа. Дөрөҫөрәге, уларға был төбәктә тыныслыҡ кәрәк. Атмаһындар, үлтермәһендәр, шартлатмаһындар. Бының өсөн улар Кавказ республикаларына күпләп аҡса бирә. Һөҙөмтәһе күренмәй. Аҡсаны үҙләштерәләр. Үлтереш тамамланмай. Ғәскәрҙәр индереп ҡарайҙар. Атыш барыбер туҡтамай. Президент Дмитрий Медведевтың Дағстанға килеп ҡайтыуын ғына көтөп торғандармы ни? Атыш та, үлтереш тә дауам итте.

Сит илдәр Кавказда үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғырта, улар бында Рәсәйҙең йоғонтоһон юҡҡа сығарырға ниәтләй. Америка Ҡушма Штаттары, Төркиә, Европа дәүләттәре, Ғәрәп мәмләкәттәре был төбәккә үтеп инергә ниәтләй, тип әйтеүселәр юҡ түгел. Ҡаршы түгелмен. Эйе, Кавказ өҫтә әйтеп үтелгәндәрҙең барыһы өсөн дә "тәмле бәлеш". Ә Рәсәй өсөн Кавказ кәрәкмәйме һуң, тигән һорау биргем килә. Бик кәрәк. Тик илебеҙ бында башҡаларҙан айырмалы рәүештә аныҡ ҡына сәйәсәт үткәрергә һаман әҙер түгел. Теләһә ниндәйе түгел, ә милләттәрҙе һаҡлап алып ҡалыу, үҫтереү сәйәсәте. Рәсәйҙең уйланылған милли сәйәсәте булмауы һәр ваҡыт уны тарҡалыу, юҡҡа сығыу ҡурҡынысы алдына килтергәнен илебеҙ тарихындағы бер генә етәксе лә аңламаны. Улар өсөн милли сәйәсәт һәр ваҡыт милләттәрҙе юҡҡа сығарыу сәйәсәтен аңлатты. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был хәл әле лә шулай. Һәм тағы ла. Бөгөн милли проблемаларҙы бары тик тел, тарих, мәҙәниәт һәм әҙәбиәткә ҡалдырып ҡарау дөрөҫ юл түгел. Милли проблемалар иң тәүҙә ер һәм уның аҫтындағы байлыҡтар менән бәйле. Һәр бер милләт үҙ ерен үҙе эшкәртергә теләй. Кавказ халыҡтары миҫалында был ап-асыҡ күренә. Балҡарҙар менән ҡабардиндар тап ер өсөн низағлашалар. Береһе тигеҙлектә йәшәй, эшкәртеү өсөн ер уңайлы. Икенселәре тау итәгендә. Унда мал көтөүе яҡшыраҡ. Шул уҡ хәл ингуштар менән осетиндар араһында ла. Дағстанда ла үҙәк мәсьәлә - ер. Башҡорттар әлегә ер мәсьәләһен ул хәтлем киҫкен тоймай. Тик ауылдарының тирә-яғындағы биләмәләр яттар ҡулына эләгеп, урманға ағас артынан, йылғаға балыҡ артынан бара алмай аҙапланһалар, беҙҙең халыҡ та Кавказ халыҡтарының хәлен яҡшыраҡ аңлай башлаясаҡ.

Әлегә иһә Мәскәү милли сәйәсәт өлкәһендәге быға тиклем өлгәшелгән уңыштарынан да баш тартырға тора. Милли мәғарифтың тамырына балта сабыу, төбәк компонентын юҡҡа сығарыу - ил халыҡтарын ҡабаттан бер һыҙыҡҡа баҫтырыу менән бер. Советтар Союзында беҙҙе бер ҡалыпҡа индереп ҡаранылар инде. Һөҙөмтәһен үҙегеҙ күреп тораһығыҙ.

Тик Рәсәй етәкселеге, рәсми Мәскәү һаман фәһем ала белмәй.

**Таһир ИШКИНИН.**

*НИҺАЙӘТ!*

## Европа Хартияһы яҡлай

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Татарстан Республикаһы Дәүләт Советының Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведевҡа, РФ Хөкүмәте рәйесе Владимир Путинға, РФ Федераль Йыйылыш Федерацияһы Советы рәйесе Сергей Мироновҡа, РФ Федераль Йыйылыш Дәүләт Думаһы рәйесе Борис Грызловҡа төбәк телдәре һәм әҙселекте тәшкил иткән халыҡтар телдәре Европа Хартияһын ратификациялау тураһындағы мөрәжәғәтен бер тауыштан яҡланы.**

Ҡарар проекты Урындағы үҙидара һәм йәмәғәт ойошмалары буйынса комитет һәм уның рәйесе Зөфәр Еникеев тәҡдиме буйынса индерелгән. “1996 йылда Европа Союзына инеп, Рәсәй Европа хоҡуҡтары нормаларын үтәргә бурыс алғайны, - ти Зөфәр Ирғәле улы. - Был хоҡуҡтың мөһим акты булып 1996 йылдың ноябрендә ҡабул ителгән төбәк телдәре йәки әҙселекте тәшкил иткән халыҡтар телдәре Европа Хартияһы тора. Уның төп идеяһы - Европаның күп теллелеген һаҡлау һәм күбәйтеү. Хартия һәр гражданға туған телендә белем алырға, уны йәмғиәт һәм дәүләт тормошонда ҡулланырға хоҡуҡты гарантиялай. Хартияға ярашлы, төбәк телдәрен дәүләт үҙе һаҡларға һәм яҡларға тейеш”.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Өфө тимер юл вокзалында "Вокзал-такси" пилот проекты эшләй башлаған. Йәғни пассажирҙар вокзалдың икенсе ҡатындағы уңайлы залда ултырып ҡына таксиға заказ бирә ала.

✓ Май айында эшһеҙҙәр һаны 4800 кешегә ҡыҫҡарған. Шулай итеп, 1 июнгә республикала 43095 эшһеҙ кеше иҫәпкә алынған. Шул уҡ ваҡытта халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәренә республика предприятиелары һәм ойошмалары тарафынан үҙ вакансиялары тураһында белдереп мөрәжәғәт итеүҙәр ҙә артҡан. Вакансиялар иҫәбе быйыл биш айҙа 65,4 мең урынға барып еткән. Эш урындары артыуы хеҙмәт баҙарындағы көсөргәнеште лә кәметә төшкән.

✓ Республика иҡтисад-лицей интернаты быйылғы уҡыу йылына 7-се, 9-сы синыфтарға уҡыусылар ҡабул итә. Уҡырға инергә теләүселәр 22-23-сө июндә математиканан, рус һәм башҡорт телдәренән һынау тота.

✓ Төркиәнең Стамбул ҡалаһында Башҡортостандың Мәҙәниәт көндәре булып үтте. БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев етәкселегендәге делегация вәкилдәре Ислам тарихын, мәҙәниәтен һәм сәнғәтен өйрәнеү буйынса фәнни-тикшеренеү үҙәгендә булды һәм уның генераль директоры Хәлит Эрен менән осрашты.

✓ Башҡортостанда БДИ буйынса ҡәнәғәтләнерлек билдә алмаған 2 меңдән ашыу уҡыусы - уларҙың 1300-ө рус теленән, 800-ө математиканан яңынан имтихандар тапшырасаҡ. Математиканан БДИ биргән 300-ҙән ашыу уҡыусы һынау һөҙөмтәләре менән риза булмайынса, апелляцияға биргән. Конфликт комиссияһы ике көн эшләйәсәк.

✓ "Тамыр" телерадиостудияһы төшөргән "Ҡамыр батыр" әкиәте (сценарий авторы - Гөлназ Ҡолһарина, ҡуйыусы-режиссер - Айгөл Малбаева, ҡуйыусы-оператор - Илдар Насретдинов) Ханты-Манси ҡалаһында үткән "Включайся!" балалар телевидениеһының IV халыҡ-ара фестивалендә беренсе урын яуланы. Шулай уҡ конкурсҡа тәҡдим ителгән "Сәңгелдәк" тапшырыуы "Балалар өсөн эшләнгән тапшырыу" номинацияһында иң яҡшы бишәү иҫәбенә инһә, "Байтус" "Иң яҡшы күңел асыу тапшырыуы" номинацияһында махсус призға лайыҡ була.

ҺӘЙБӘТ БИТ!

# "КОМЕНДАНТ СӘҒӘТЕ"...

## ата-әсәгә лә яуаплылыҡ өҫтәй

**2009 йылдың майынан "Рәсәй Федерацияһында бала хоҡуҡтарының төп гарантиялары тураһында"ғы Федераль законға индерелгән үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр үҙ көсөнә инде.**

Һүҙ бында балалар өсөн комендант сәғәте индереү, йәғни 18 йәше тулмаған балаларға көндөҙгө һәм төнгө мәлдә ата-әсәләр (йәки уларҙы алыштырыусы шәхестәр), йәиһә балалар ҡатнашлығындағы сараны ойоштороусы оҙатыуынан тыш йәмәғәт урындарында булыу ваҡытын сикләү тураһында бара. Төнгө ваҡыт, тип закон сығарыусылар урындағы ваҡыт менән киске 10-дан иртәнге 6-ға тиклемге мәлде билдәләгән. РФ Президенты Дмитрий Медведев тарафынан индерелгән нормалар РФ субъекттарына урындағы традициялар һәм закон үҙенсәлектәренә таянып, бындай урындарҙың исемлеген төҙөү хоҡуғын бирә. Бында спиртлы эсемлектәр һатылған сауҙа итеү һәм туҡланыу урындары, интернет салондары һәм баланың һаулығына, уның физик, интеллектуаль, психик, рухи һәм әхлаҡи үҫешенә зыян килтереүсе башҡа урындар инә. Был закон буйынса балиғ булмағандарға көндөҙ енси характерҙағы тауарҙар, спиртлы эсемлектәр һатылған урындарға инеү тыйыла.

Федераль закон буйынса, тыйылған урындарға йөрөүсе балаларҙың ата-әсәләренә йәки уларҙы алыштырыусы кешеләргә һәм эске эштәр органдарына хәбәр итеү, бындай балаларҙы өйөнә ҡайтарып ҡуйыу, әгәр ҙә ата-әсәнең ҡайҙалығын асыҡлап булмаған осраҡта социаль реабилитация үткәреү маҡсатында балиғ булмағандар өсөн махсус учреждениеларға урынлаштырыу тәртибен субъект үҙе хәл итә.

Ҡайһы бер төбәктәрҙә бер нисә йыл "комендант сәғәте" социаль тәжрибә сифатында үткәрелә лә инде. Статистика күрһәтеүенсә, бындай сикләүҙәр һиҙгәй һөҙөмтә бирә: балиғ булмағандар ҡатнашлығында тәртип боҙоуҙар кимәле ҡыҫҡара, үҫмерҙәр енәйәте кәмей.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!





# БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ҒЫНА ТҮГЕЛ,

## тотош Рәсәйҙең батыры ул Салауат!

(Башы 1-се биттә.)

Тамаша артабан Салауат йыйынының төп майҙанына, махсус эшләнгән сәхнә түренә күсте. Мин үҙем был сәхнәлә ниндәйҙер мөғжизә күрергә өмөтләндем. Бына хәҙер сәхнәләге ваҡиғалар солғанышы мине уй елкәненә башҡортомдоң бөйөк улы йәшәгән заманға алып барыр ҙа, шул йылдарҙағы шанлы тарихҡа күҙ һалып, бер генә мәлгә халҡым кисерешен уртаҡлаша алырмын, Салауат ораны аҫтында ирек өсөн яуға күтәрелгән ир-азаматтарыбыҙға ҡарап һоҡланырмын, бына бит беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ниндәй көслө рухлы, ҡыйыу йөрәкле булған, бына шундай ул минең милләтем, тип сикһеҙ ғорурлыҡ тойғоһо кисерермен, тип көттөм. Сәхнәлә барған тамашаны ҡарағанда йәнем, йөрәгем менән тойғом килгәйне Салауат рухы сағылышын. Ниндәйҙер бер мәлдә тамашаны алып барыусы Хөрмәт Үтәшев батырыбыҙ хаҡында тулҡынландырғыс һүҙҙәр әйтте. Күңел тулышыуынанмы, әллә йән әрнеүенәнме, шул ике һүҙ йөрәккә үтеп инеп, ике бөртөк күҙ йәшен битемдән тәгәрәтеп төшөрөп ебәрҙе. Әммә шунан ары күңел тетрәтерлек бер генә һүҙ ҙә яңғыраманы. Тағы ла йыр, бейеү китте. Барыһы ла ҡәҙимгесә, барыһы ла һабантуйҙарҙағыса килеп сыҡты.

Салауат йыйынында элек тә ҡатнашҡаны булғандар, әлбиттә, әлегеһенең дә, бынан алдағы төрлө райондарҙа үткән йыйындарҙың да иң тәүге Салауат йыйынынан ҡайтышыраҡ икәнен һиҙыҡ өҫтөнә алды. Беҙҙең халыҡтың күңеле киң шул, ҡайһы берәүҙәр әлеге тамашаның төҫһөҙөрәк булыуына бик иғтибар итмәй, "Күрсәк бит, күрсәк..." тип уны аҡлағандай итте. Беҙ бит хәҙер барыһын да ана шул "күрсәк"кә һылтайбыҙ ҙа ҡуябыҙ. Әммә тамашала сығыш яһаусыларҙың күплегең, ҡатнашыусыларҙың алыҫ араларҙы яҡлын итеп, республиканың төрлө ҡалаларынан-райондарынан килеүен, программаның тәьҫирен көсәйтеүсе төрлө күренеш-сараларҙың бихисаплығын иҫәпкә алғанда, матди күрсәк һиҙелмәй ҙә кеүек. Ә бына иждад "күрсәгән", йәғни программаның тетрәндерерлек рухы юҡлығын һәр кем тойғандыр.

"Башҡорт сараларының баш ҡалала шулай үткәне лә яҡшы инде..." тине кемдер. Эйе, беҙ һәр ваҡыт үҙебеҙгә ҡағылғанда ташламалар яһайбыҙ: "Беҙгә ярағын инде..." тибеҙ. Әммә ошондай ҡараш беҙҙе түбәнһетә, мыҫҡыл итә икәнен аңларға ваҡыт түгелме икән? Ауылда ла, ҡалала ла, баш ҡалала ла халҡыбыҙҙы, халҡыбыҙҙың данлыҡлы улдарын һәм ҡыҙҙарын, шәхестәребеҙҙе лайыҡлы баһалауҙары кәрәк беҙгә. Шулай уҡ Салауат батырыбыҙҙы ла, ғәҙәт итеп алыуҙарынса, екәт батыры итеп түгел, ә ерен, халҡын ҡурсалаған бөйөк шәхес, бөйөк шағир итеп күтәреү фарыз. Салауат Юлаевтың шәхесен күтәрерлек тамаша ҡороу беҙҙең милләттәштәргә генә түгел, бигерәк тә байрамға килгән ҡунаҡтарға кәрәк ине. Әммә... Улар майҙандағы тамашаны ҡарағандан һуң кем тип ҡабул итте икән батырыбыҙҙы? Ә бит Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимовтың сығышында яңғырағайны батырыбыҙҙың дәрәжәһен күтәргән фекер: "Салауат Юлаевтың төрлө телдә һөйләшкән, төрлө дин тотҡан төрлө милләт халыҡтарының берҙәмлеге һәм дуҫлығының мөһимлеген аңлауын беҙ юғары баһалайбыҙ, - тине Президент үҙенең сығышында. - Ул халыҡтарҙың рухи ҡиммәттәренә һәм һәр кешегә ихтирам талап иткән, шуға ла Башҡортостандың ғына түгел, ә тотош Рәсәйҙең батырына әйләнгән". Башҡорт халҡының Рәсәй, донъя батырына әйләнгән Салауатын йыйындарҙа ла, һәр төрлө сәхнәләрҙә лә лайыҡлы күрһәтергә һәм күтәрергә кәрәк, тигән теләкте артабанғы йыйындарҙы ойоштороусылар күңеленә теркәп ҡуйғы килә.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

**Әйткәндәй... Булып үткән Салауат йыйынында Өфө ҡалаһының милли көрәш буйынса Асыҡ чемпионаты үтте. Спортсылар алты ауырлыҡ категорияһында көс һынашты. 60 кг ауырлыҡта - Әлгиз Әхмәтйәнов, 70 кг-да - Альберт Рәхмәтуллин, 80 кг-да - Наил Мөхәммәтйәнов, 90 кг-да - Юнир Ильясов, 100 кг-да - Рөстәм Зыяҡаев, 100 кг-дан ашыу ауырлыҡта Әсләм Хафизов еңде. Абсолют чемпион исеменә барған ярышта Әсләм Хафизов еңеп сыҡты.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә йәйге һауыҡтырыу кампанияһына әҙерлек барышы һәм янғынға ҡаршы һыу менән тәьмин ителеш тураһында мәғлүмәттәр тыңланды.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлмирә Баҡыева журналистар менән осрашты. Билдәләнелеүенсә, быйыл һаулыҡ һаҡлау өлкәһенең ҡала маҡсатлы программаларын финанслауға Өфө бюджетынан 100 миллион һум аҡса бүленәсәк. "2008-2010 йылдарҙа әсә һәм бала һаулығы - Өфөнөң демографик потенциалы" программаһы сараларын тормошҡа ашырыуға сығымдар ҡаралған. "2008-2010 йылдарҙа Өфөнөң дауалау-профилактика учреждениеларын хирургия профилендәге юғары технологиялы медицина ҡоралдары менән йыһазландырыуҙы яҡшыртыу буйынса саралар тураһында" маҡсатлы программа сиктәрендә ҡаланың бер нисә стационары 130 миллион һумлыҡ заманса ҡоралдар менән тәьмин ителәсәк.

✓Октябрь районы хакимиәтендә 50 һәм 60 йыл бергә ғүмер кисергән ғаиләләрҙе ҡотлау тантанаһы үтте. Һәр ғаиләгә БР Президенты Мортаза Рәхимов исеменән бүләктәр тапшырылды.

✓24-25 июндә М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының Бәләкәй залында француз режиссеры Стефани Лоик ҡуйыуындағы спектаклдең премьераһы үтәсәк.

✓"Башҡортостан радиоһы" программаларын алып барыусы Эльмира Мостафина Пермь ҡалаһында үткән "Рәсәй ҡалҡаны - 2009" Бөтә Рәсәй хәрби-патриотик тематикалы телевизион һәм радио программалары фестиваленең гран-прийын яуланы.

✓24 июндә БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығы "Уҡыу йортон тамамлаусыларҙы эшкә урынлаштырыу проблемалары" тигән темаға тура бәйләнеш ойоштора. 251-89-76 телефонына 14.00 сәғәттән 17.00 сәғәткә тиклем шылтыратыусыларҙың һорауына Йәштәрҙе эшкә урынлаштырыу республика үҙәге белгестәре яуап бирәсәк.

*✓ Тирмәләр - һабантуй яланының төп күрке. Йылдан-йыл тирмә ҡороусылар оҫтара, улар тирәһендә тупланған экспонаттар, халҡыбыҙҙың боронғо ҡомартҡылары байыраҡ була бара.*

ҺАЙ-һАЙ-һАЙ!

# БЕРҒАМЫТ БУЙЫНДАҒЫ ҺАБАНТУЙ ҘА...

## һабантуйса булды

**Беҙҙең Ишембай районы һабантуйы республикала бер түгел, өс мәртәбәле сара уҙған көндәргә - Рәсәй көнө, Өфө ҡалғаһенең барлыҡҡа килеүенә - 435 йыл, мәшһүр батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуыуына 255 йыл тулған мәлгә тура килеүе менән үҙенсәлекле булды. Тап ошо ваҡытта Башҡортостан халыҡтарының II ассамблеяһы үткәрелеүе лә байрамыбыҙҙа сағылыш тапты. Һабантуй ҡунаҡтары араһында Ассамблея эшендә ҡатнашҡан Чечен Республикаһының мәҙәниәт министры ла бар ине. Уға башҡорт еренең хозурлығына һоҡланыу менән бер рәттән, башҡорттоң эске тәбиғәтен, күңел торошон, рух байлығын күрергә лә форсат булды.**

Ә күрерлек, һоҡланырлыҡ, ҡыҙығырлыҡ, хатта көнләшерлек нәмәләр күп булды һабантуйҙа. Ишембай районы муниципаль районы хәкимиәте башлығы Марат Ғайсин, ишембайҙар алдында сығыш яһап, 2009 йылдың ярты йылында эшләнгән эштәр - хеҙмәт коллективтарының етештереү күләмен арттырыу һәм иҡтисади тотороҡлоҡто күтәреү буйынса көсөргәнешле эш алып барыуы, ауыл хужалығы үсешендә, үсемлекселектә һәм малсылыҡта алға китеш күҙәтелеүе тураһында һөйләне. Һәр уңыштың аныҡ кешеләр исеме менән бәйле икәнен дә әйтеп үтте.

Һабантуйҙа йылдың-йылы районыбыҙҙың иң төҙөк ауылдары ла, уңған йорт хужалары ла иғтибарһыҙ ҡалмай. Быйыл иһә "Иң яҡшы ауыл - ауыл биләмәһе үҙәге" конкурсына йомғаҡ яһалды. Петровск ауылы 1-се урын алыуға иреште. Этҡол ауылы лайыҡлы рәүештә 2-се урынға сыҡты. Кинйәбулаттың да күҙгә күренеп матурлана барыуы баһаланды, улар 3-сө урын яуланы.

"Иң яҡшы бәләкәй ауыл" конкурсында призлы урындар яулаусы Әрмет-Рәхим (1-се урын), Һайран (2-се урын) һәм Иҫке Һәйет (3-сө урын) ауылдары хаҡында ла бик күп маҡтау һүҙҙәре әйтергә була. Ниндәй генә эш булмаһын - ағас ултыртыу, кәртәләрҙе буяу, зыяратты төҙөкләндереүме - бындағы халыҡ берҙәмлеге менән алдыра. Әлбиттә, эштәрҙе ойоштороусыларҙан, уларҙың халыҡ менән уртаҡ тел таба белеүенән дә күп нәмә тора. Был конкурста бөтәһе 11 ауыл биләмәһе ҡатнашҡан, дөйөм саранан Верхотор һәм Скворчиха ауыл биләмәһе Советтары ғына ситтә ҡалған. Тимәк, ваҡытында тырышмағандар, халыҡты ойоштора белмәгәндәр бында. Хакимиәт комиссияһына "Өлгөлө шәхси ихата" конкурсында ҡатнашыусылар араһында ла урындар билдәләү еңел булмағандыр. Шулай ҙа был конкурста 1-се урын алыусы Әрмет-Рәхим ауылынан Наил Шәрәфетдиновтың, 2-се урынға лайыҡ булған Этҡол ауылынан Кәрим Мәхмүтовтың һәм 3-сө урын бүлешеүсе Ишәйҙән Фуат Буранбаевтың, Биксәндән Дамир Ямалетдиновтың, Маҡарҙан Винер Рәхмәтуллиндың ҡупшы, һәр ере төҙөк, килешле ихаталарын күргәндәр жюриҙың ҡарары менән килешмәй булмаҫ. Ғөмүмән, бындай конкурстарҙа ҡатнашырға теләк белдереүселәр күбәйгән һайын, әйләнә-тирәбеҙ, ауылдарыбыҙ матурлана, бөхтәләнә бара.

Тирмәләр - һабантуй яланының төп күрке, тиһәк, хата булмаҫ. Йәйғор ише төҫтәре, ҡаҙанда боҫрап бешкән аштары менән тартып тора бит улар. Шуныһы ла мөһим, йылдан-йыл тирмә ҡороусылар оҫтара, улар тирәһендә тупланған экспонаттар, халҡыбыҙҙың боронғо ҡомартҡылары байыраҡ була бара. Хәҙер тирмәләр аш, ял урыны ғына итеп түгел, ә ата-бабаларыбыҙ, тыуған яғыбыҙ тарихы менән тәрәнерәк танышыу мөмкинлеге булараҡ ҡабул ителә. Шулай итеп, 1-се урынды лайыҡлы рәүештә Этҡол ауыл хакимиәте тирмәһе алды. Ышанаһығыҙмы, юҡмы, Этҡолдоң уңған хужабикәләре 156 төр башҡорт халыҡ ашы әҙерләп килтергән. Ҡаҡланған ҡаҙ, ҡаҙылыҡ, тултырма, ике тиҫтәнән ашыу төр бәлештәр, хатта балтырған ашы... Ул ғына ла түгел, ситәндән ҡоролған һарайҙарында бәрәсе менән кәзә, ҡаҙ бәпкәләре, тауыҡ себештәре күрергә була ине. Ә инде йорт йыһаздары үҙе бер музейға торош итә.

Быйылғы һабантуйҙа тәүге тапҡыр айырым рәүештә кескәй тамашасыларҙың да күңелен күрҙеләр. Улар өсөн айырым сәхнә ҡорҙолар. Балалар һәм үҫмерҙәр ижад йорто ҡорған ҡупшы сәхнәнән байрам дауамында йырмоң, дәртле бейеүҙәр өҙөлмәне. Ата-әсәләренең елкәһендә ҡунаҡлап, эҫегә лә бирешмәй, ихлас сәпәкәйләп ултырған кескәйҙәрҙе күҙәтеү үҙе бер шатлыҡ булды.

Төп сәхнәлә барған һоҡланғыс күренештәрҙе, үҙебеҙҙең артистарҙың ғына түгел, Стәрлетамаҡ бейеү ансамбленең сығыштарын халыҡ бик яратып ҡабул итте. Стәрлетамаҡтар чечен халыҡ бейеүен башҡарғанда төп ҡунаҡтарҙың береһе Чечен Республикаһының мәҙәниәт министры Дикало Музакаевтың, ә ул профессиональ бейеүсе, түҙмәй сәхнәгә атылып сығып оҫта баҫыуы үҙе бер онотолмаҫ күренеш булды.

Милли көрәш барған майҙан тирәһендә, ғәҙәттәгесә, халыҡ күпләп йыйылды. Үҙҙәрен тәүләп һанап ҡарарға теләүселәр ҙә, оҫта көрәшселәр ҙә байтаҡ ине. 1-се урын яулаусыларҙы әйтеп үтәбеҙ: Яңы Әптектән А.Хәмзин (60кг), Ишембайҙан М.Ғәббәсов (70кг), Этҡолдан А.Ҡолбаев (80кг), Ишембайҙан Е.Миронов (90кг) һәм Р.Собханғолов (90кг). Абсолют еңеүсе титулын алып, берҙән-бер һарыҡты күтәреү бәхете Евгений Мироновҡа тәтене. 2-се урынды Илдар Моратов, 3-сө урынды Рөстәм Собханғолов яуланы.

Бына шулай, уйнап-көлөп, йырлап-бейеп, ярышып, көрәшеп танһығы ҡанған халыҡтың һабантуйҙан күңеле булды. Көтөлмәгән осрашыуҙар, танышыуҙар, аралашыуҙар ҙа бүләк иткәндер ул, моғайын, күптәргә.

**Гөлнур ДӘҮЛӘТЙӘРОВА.**
**Эльвира ӘЛМӨХӘМӘТОВА.**
**"Торатау" гәзите хәбәрселәре.**









Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



## Әпсен-төпсөн, шифаһы тейһен

**Мин кеше араһында йөрөгәндә лә, ҡунаҡта ла, төрлө китап уҡыһам да им-том, шифалы үләндәр тураһында ҡолаҡ ҡарпайтып тыңлайым да, теркәп тә ҡуям. Бына ҡайһы берҙәрен гәзит уҡыусылар менән дә уртаҡлашам.**

### Сәсеңде буяйһыңмы?

Сәсе ағарған ҡатын-ҡыҙ шампунь һәм буяуҙың сәс тамыры, баш тиреһе, мейе өсөн зарарын аңлай, әлбиттә. Шуға күрә буяу менән шампунды үлән һәм кер һабыны менән дә алмаштырып була.

**а)** 6 дана әсе ҡыҙыл боросто 500 гр араҡыға ҡушып, ҡара төҫтәге быяла һауытҡа һалырға ла өс аҙнаға ҡараңғыға ултыртырға. Шул төнәтмәне аҙнаһына алты мәртәбә сәстәреңә, сәс төптәренә һөртөргә. Йәшәрәһең, матураяһың.

**б)** ҡоро кеүәҫте шыйыҡ бутҡа итеп йылы һыуҙа болғайһың да сәс төптәренә бармаҡтар менән массаж яһап буяйһың. Кискә тиклем башыңды бәйләп йөрө һәм йыу. Сәс каштан төҫөнә керер. Ғөмүмән, сәс йыуыр өсөн кер һабынын файҙаланырға кәрәк. Мин үҙем дә, әсәйем әйтмешләй, тыуған көндән алып тик кер һабынын ғына файҙаланам.

### Үксә, ҡул бармаҡтары ярылһа...

**а)** быяла шешәгә эҫе һыу ҡойоп, табандар менән тәгәрәтеп ултыр.

**б)** үксәне лә, ҡулды ла кер һабыны менән йыу. Ҡороҡандан һуң лейкопластырь менән йәбештер. Көн аша табандарыңа крем һөрт.

### Бауырың ни хәлдә?

Бауыр ауыртмаһын өсөн ҡарағаттың яҙғы бөрөһөн сәй итеп эсергә кәңәш ителә. Ғөмүмән, ҡарағаттың бөрөһөн киптереп алырға кәрәк.

**Дауа өсөн бөтә үләндәр ҙә, ысулдар ҙа үҙебеҙҙә, аяҡ аҫтында - ялҡаулан маҫҡа ғына кәрәк.**

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ




**Талҡаҫ күле - тәбиғәттең иҫ киткес матур бер мөйөшө һәм ял итеү урыны. Күлдең майҙаны - 3,9 кв. км, һыу күләме - 15,9 млн. куб.м, уртаһында тәрәнлеге - 12 м., ә көнбайыш яғындағы утрау эргәһендә - 20-25 м., күлдең оҙонлоғо 4000 м, киңлеге 1250 м., яр һыҙаты оҙонлоғо - 12 км. Үткән йөҙйыллыҡтың 60-сы, 80-се йылдарында Таналыҡ йылғаһы башында дамба төҙөлә, ул һыуҙың артыуына килтерә. Күл ярҙың һөҙәк яғында 15-20 метрға киңәйә.**

Талҡаҫ күле ер ҡатламындағы әүҙем тектоник процестар, йәғни вулканик эшмәкәрлек эҙемтәһендә барлыҡҡа килә.

Талҡаҫ һүҙе нимәнән килеп сыҡҡан? Бер юрау буйынса, Талҡаҫ "тал ҡаҙы" тигәнде аңлата.

Күлдә шифалы ләм табылды. Екатеринбург ҡалаһындағы Курортология буйынса ғилми-тикшеренеү институты мәғлүмәттәре буйынса, ләм һаҡламы яҡынса 5,5 млн. тонна тәшкил итә. Бында йөрәк, ҡан тамырҙары һәм нервылар системаларын дауаларға мөмкин. XX быуаттың 80-се йылдарынан алып шифалы ләмдәр Сибай ҡалаһы профилакторийында һәм Баймаҡ ял йортонда дауалау маҡсатында ҡулланыла башланы.

Талҡаҫ яр буйҙарындағы ләмдең дауалау үҙенсәлектәре борондан билдәле булған. Урында йәшәүселәр уны йыш ҡына быуындар һыҙлаған ваҡытта ҡулланған. Шаһиттар һүҙҙәренән һәм һаҡланған риүәйәттәр буйынса, ауырыуҙар ләмгә буялып, күлдең яр буйында ятыр булған.

Күлдә бик күп балыҡ төрҙәре йәшәй. Ауыр һуғыш йылдарында һәм һуғыштан һуң Иҫән ауылы һәм Түбә ҡасабаһы халҡы балыҡ менән генә туҡланған. Был йылдарҙа "Таналыҡ", "Салауат" исемендәге колхоздарҙа һәм ял йорттарында үҙҙәренең балыҡ тотоусы бригадалары булған.

Район һәр ваҡыт күл тирәһе территорияһында төҙөкләндереү эштәре алып бара. 50-70-се йылдарҙа күл тирәләй, көнсығыш һәм көньяҡ яр буйҙарына урман, күбеһенсә шыршы ағастары ултыртыу эштәре ойоштороло. Күлдең төньяғына транспортта сығыу тыйыла. Әлеге ваҡытта күл, көньяҡ-көнбайыш өлөшөнән башҡа, урман менән уратып алынған. Бында һыу инеүе уңайлы. 2000 йылда бындағы ял йорто пляжында заманса һыу инеү урындары төҙөлә. Шулай уҡ элек урмандар күпкә киңерәк булған. Ҡуйы урман аша хатта ауыл яғынан күл дә күренмәгән. Ҡайһы бер ҡатындар һыуға яңғыҙ барырға ҡурҡҡанға, ирҙәре, йә туғандары менән бергә барыр булған.

Ҡасандыр күлгә 12 шишмә ҡойған. Әлеге ваҡытта улар 3 йәки 4 тип иҫәпләнә, ә күлдән бер генә йылға - Таналыҡ ағып сыға.

Күлдең уртаһында бер утрау урынлашҡан. Һуғышҡа тиклемге йылдарҙа утрау бер аҙ ҙурыраҡ булған, унда ҡайындар, талдар үҫкән. Яңы өйләнешкән йәштәр кәмәлә утрауға тиклем йөҙөп барып, ҡайынға иҫтәлек өсөн йөҙөктәр, көмөш аҡсалар элер булған.

Күл тураһында күп легендалар, риүәйәттәр бар, уларҙың береһе әлеге утрау һәм Брагин тигән кеше менән бәйле. 1753-1755 йылдарҙа Петербургтан Брагин Егор Ефим улы тау тикшереүселәр командаһы менән беҙҙең яҡтарға килә. Бер нисә һөнәрсенән башҡа, уның командаһында һалдаттар ҙа була. Улар Ирәндек тауы һөҙәгендә тикшереү эштәре башлай. Һаҡмарҙың уң яҡ ярында, Әмин ауылы эргәһендә лә алып барыла тикшереү эштәре. Элек был ауылды Ташауыл тип йөрөткәндәр. Хәҙер ҙә унда таш сығарыу урындары һаҡланған, улар әле лә "Брагиндыҡы" тип йөрөтөлә. Ошо урында Брагин тимерлектәр, оҫтаханалар төҙөткән. Эшкә урындағы халыҡты яллаған. Таш сығарыу урындарында эш шарттары түҙеп торғоһоҙ ауыр була. Брагин ауыл халҡы менән оятһыҙ рәүештә эш иткән, уларҙы мыҫҡыллаған, ҡатын-ҡыҙҙарҙы мәсхәрәләгән. Кейәүгә сығыр алдынан һәр бер ҡыҙ уның менән төн үткәрергә тейеш була. Ул үҙен был ерҙәрҙең ысын хужаһы кеүек тотҡан. 1770 йылдың июнендә академик Иван Лепехин беҙҙең яҡтарҙа сәйәхәт итә, Талҡаҫ күле буйында була һәм үҙенең яҙмаларында былай тип яҙып ҡалдыра: "XVIII быуат уртаһында тау тикшеренеүселәре отряды начальнигы Брагин бында файҙалы ҡаҙылма байлыҡтары, иң беренсе таштарҙы тикшереү эштәре алып бара. Ул урындағы халыҡты мыҫҡыл иткән, ҡатындарын, ҡыҙҙарын мәсхәрәләгән. Һөҙөмтәлә был ҡанһыҙлыҡ 1755 йылда көсләүсенең һәм талаусының үлеменә килтергән. Был башҡорттарҙың баш күтәреү ваҡыты менән тура килә".

Брагин менән уның кешеләренең законһыҙлығы һәм баш-баштаҡлығы урындағы Сураш, Әмин, Темәс һәм башҡа батырҙарҙың асыуын килтерә. Бер көндө батырҙар йәшерен кәңәшмәгә йыйыла. Унда Сураш, Әмин, Темәс, Исмәғил, Моратша, Ялан Эткол һәм Хоҙайбирҙе мулла була. Улар Брагинды үлтерергә булалар һәм берберeһенә серҙе һаҡларға һүҙ бирешәләр. Тиҙҙән был уңайлы мәл килеп сыға. Брагин бер нисә һаҡсыһы менән Талҡаҫ буйына сыға. Өс көн буйы утрауҙа балыҡ ҡармаҡлап, эсеп ята, ә һаҡсылары яр буйында ҡамыштар араһында өйрәк аулай. 1755 йылдың 15 майында, Брагиндың күл буйында икәнен белеп, батырҙар тиҙ генә ауылдан сығып, утрауға ҡаршы яҡтағы ярға йәшеренә. Сураш менән Әмин Брагин яғына йөҙөп китә. Сураш Брагинға: "Халҡымды мыҫҡыл иткәнең өсөн мин һинән үс алырға тейешмен", - тип ҡысҡыра. Әмин - кәмәгә, ә Сураш тимер осло уҡ менән Брагиндың нәҡ күкрәгенә ата. Ул кәмәгә арҡыры ҡолай. Кире торған да яуап итеп: "Сураш, һиңә булғансы, һыуға булһын", - тип ҡысҡырып, үҙенең ҡиммәтле таштарҙан эшләнгән ҡашлы йөҙөгөн һыуға ташлай. Йөҙөк артынан үҙе лә күлгә ҡолай. Ҡан эскес Брагиндың ғүмере шулай өҙөлә. Легенда буйынса, ҡашлы йөҙөк бер нисә йылдан һуң Яугилде күлендә ауҙа тотолған шамбының эсендә табыла. Шуға күрә лә, Талҡаҫ һәм Яугилде бер береһе менән ер аҫты һыуҙары аша тоташҡан, тип тә әйтәләр.

Икенсе бер легенда буйынса, йәнәһе лә, Талҡаҫ күленең ниндәйҙер бер ваҡытта һыуҙан сығып йөрөүсе хужаһы - һыу инәһе аты бар. Аттың ялы бер метрҙан оҙонораҡ, ә ҡойроғо ергә һөйрәлеп йөрөй. Ул, ғәҙәттә, күлдән төндә генә, бигерәк тә йәшен ваҡытында сыға һәм утрау ҡыҙҙырып йөрөй, тип әйтәләр.

Тағы ла бер көлкөлөрәк риүәйәт тә бар. Бына шуларҙың береһе. Талҡаҫ буйындағы Иҫән ауылы халҡы үҙенең шаянлығы менән айырылып тора. Бер ваҡыт бесән ваҡытында бер ай буйы ямғыр яуған. Аҡһаҡалдар йыйылып, иң аҡыллы ҡартҡа кәңәш һорарға килгән. Ул күлгә күрһәткән дә ямғырҙан йонсоған ауылдаштарына былай тигән: "Күренеүенсә, Талҡаҫ күлендәге һыу 40 батмандан да артмай, уны тау артына ташырға кәрәк, шул ваҡытта ямғыр шунда уҡ туҡтар". Әллә Хоҙай ауыл халҡына мәрхәмәт күрһәткән, әллә уларҙың аҡыл эйәһенән көлөүен теләмәгән, шул саҡта ямғыр яуыуынан туҡтаған, халыҡты Талҡаҫ һыуын ташыу ауырлығынан ҡотҡарған, имеш.

Талҡаҫ күленең һыу күләме 40 батман тигәндәй, шуны йөпләгән тағы ла бер легенда бар. Ауыл халҡы ике арба тоҙ һатып алған. Бер арбаны үҙҙәре менән йәйләүгә алып китергә, икенсеһен ҡышҡылыҡҡа ышанысһы ергә йәшереп ҡуйырға ҡарар иткәндәр. Шул уҡ аҡыл эйәһенең кәңәше буйынса, тоҙҙо балаҫҡа төрөп, Талҡаҫ күле төбөнә төшөргәндәр һәм ҡалҡыуыс бәйләгәндәр. Үҙҙәре бөтә ауыл менән Уралға йәйләүгә киткәндәр. Көҙгөһөн ҡайтҡас, күлдә тик буш балаҫ ҡына тороп ҡалғанын күргәндәр. Аптыраған аҡһаҡалдар тағы ла аҡыл эйәһенә кәңәш менән килгән. Ул кәкере таяҡ менән күлгә күрһәткән дә, Талҡаҫта һыу 40 батман тирәһе, шуның өсөн һыуҙы тауға ташырға кәрәк, шул ваҡытта күл төбөндә тоҙ ғына тороп ҡаласаҡ, тип әйткән. Шуның өсөн дә Иҫән ауылы халҡын шаяртып "ҡырҡбатмандар" тип йөрөтәләр.

**Талҡаҫ күле Таналыҡ йылғаһына башланғыс бирә. Элек Таналыҡ мул һыулы булған. Ул ваҡытта бер кем дә һыу башын дамба менән кәртәләмәгән, күлдең артыҡ һыуы, йылғаға башланғыс биреп, ағып сыҡҡан. Моғайын, шуғалыр ҙа, Талҡаҫ элек таҙараҡ булған һәм ләмләнмәгән дә, һаҙлыҡҡа ла әйләнмәгән, эргәһендә ҡамыштар ҙа үҫмәгән. Ә былар - күлдең һаҙлыҡҡа әйләнеүенең тәүге билдәләре. Тимәк, Талҡаҫты һаҡлау тураһында бөтөн ил менән хәстәрләргә ваҡыт еткән. Әгәр ҙә ул Башҡортостандың ете мөғжизәһенең береһе тип иғлан ителһә (ә ул быға лайыҡ), күлебеҙгә дәүләт тарафынан ниндәйҙер иғтибар бирелер ине. Ә бит тәбиғәттең гүзәл мөйөшөн күрергә республиканан ғына түгел, сит илдәрҙән килеүселәрҙең дә аяҡ юлы өҙөлмәй. Йәмле Талҡаҫыбыҙ беҙҙе һәр ваҡыт ҡыуандырып торһон ине.**

**Исмәғил МӨХӘМӘТЙӘНОВ.**

✓ ***Элек башҡорт ятатҡан атын йән дуҫылай итеп ҡараған, уның ялдарын һыйпап-тарап та оло ҡыуаныс кисергән һәм йән тыныслығына өлгәшкән.***

УЯН, УЙЛАН...

**Мине башҡа башҡорт зыялылары ла битараф ҡала алмаған бик хәүефле проблема борсой: Федераль үҙәк әлегә тиклем мәктәптәрҙә законлы рәүештә уҡытылып килгән милли-төбәк компоненты предметтарын - туған телдәрҙе, Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте һәм географияһын киләсәктә сикләп кенә ҡалмай, дәүләт мәғариф стандарттарынан бөтөнләйгә алып ташлау сәйәсәтен ғәмәлгә ашыра башланы. Сәйәсмәндәрҙең генә түгел, Рәсәй Мәғариф министрлығы етәкселәренең дә халыҡтарҙың милли ихтыяждарын һанға һуҡмауы аптыратып ҡына ҡалмай, йәнде көйҙөрә, ошо сәйәсәткә ҡаршы тороу теләге уята.**

# МИЛЛИ МӨХИТЬЕҘ ҠАЛҒАН ХАЛЫҠ...

## миллилегенән дә яҙасаҡ

Фән һәм мәғрифәт сәскә атырға тейешле XXI быуатта Мәскәү чиновниктарының халыҡтар яҙмышына шул тиклем яман һәм империясыл мөнәсәбәттә булыуы сикһеҙ ғәжәпләндерә. Үҙен демократик тип нарыҡлаған дәүләттә бындай тоталитар ҡараштар нисек барлыҡҡа килә икән? Бер яҡтан, милли өлкәлә улар үҙҙәренең компетентһыҙлығын күрһәтһә, икенсе яҡтан, был илдә милли ситуацияны аңлы рәүештә ҡаҡшатыуға тиң. Рәсәйҙә көн иткән йөҙҙән ашыу милләт кешеләре үҙ ерҙәрендә Мәскәү дәүләтенән күпкә алдараҡ, әле Киев Русе лә булмаған замандарҙан бирле йәшәй. Ә хәҙер килеп, кемдер уларҙың барыһын да бер төрлө халыҡҡа әйләндерергә маташа. Әммә был бер ҡасан да тормошҡа ашмаясаҡ. Ошо хаҡта билдәле ғалим-тарихсы Лев Гумилев үҙенең "Евразия ритмдары. Дәүерҙәр һәм цивилизациялар" тигән китабында хәҙер ҙә бик фәһемле булған фекерҙәрен теркәп ҡалдырған: "Этностарҙың һәр ҡайһыһы башлыса үҙ экологик нишаһын, йәғни этноландшафт зонаһын биләй һәм үҙенең ҡабатланмаҫ тарихи яҙмышын, йәки оригиналь стереотип булмышын һәм күрше этностар менән билдәле бер мөнәсәбәттәр традицияһын булдыра. Уларҙың бер-береһенә ҡушылыуы илдең барлыҡ ландшафттары бер төрлөгә әйләнгән хәлдә генә мөмкин булыр ине, әммә быны хатта алыҫ перспективала ла принципиаль рәүештә ғәмәлгә ашмаҫлыҡ, тип танырға кәрәк. Ҡушылыуҙың мөмкин булмауы татыу күршеләрсә һәм ихлас дуҫлыҡта йәшәй алмауҙы аңлатмай. Киреһенсә, полиэтник дәүләттә халыҡтарҙың тотороҡло йәшәй алыуы өсөн берҙән-бер дөрөҫ девиз - "Татыу, әммә айырым-айырым". Дошманлашыу һәм ҡан ҡойоу кешеләргә уларҙың бер үк төрлө булыуҙарын һендереүҙән башлана. Кампучияла берҙәм кхмер милләтен төҙөүҙән башланған тоталь геноцид "ҡушылыу"ға ымһыныусы барса этносәйәсмәндәргә дәһшәтле киҫәтеү булып тора".

Ысынлап та, ғалимдың ошо һүҙҙәре бик ышандырырлыҡ яңғырай. Әллә ҡайҙа алыҫ бараһы ла түгел - үҙебеҙҙең элекке уртаҡ дәүләтебеҙ булған Советтар Союзын иҫкә төшөрөү ҙә етә. Ул заман идеологтары беҙҙән "берҙәм совет халҡы" яһап, милли үҙенсәлектәрҙе нисек булһа ла бөтөрөү юлына баҫҡайны, әммә совет империяһы эстән емерелеүгә дусар булды. Фекеребеҙҙе тағы ла асығыраҡ һәм дәлиллерәк итеү өсөн Л. Гумилевтың әлеге китабынан тағы ла бер өҙөк килтерәйек: "Әлбиттә, провинциялар үҙҙәренең көсөн тоя башлаһа, үҙәк власты бигүк тыңлап бармай. Мәҫәлән, антик Римда б.э. I быуат баштарында провинциалдар тәхеттең берҙән-бер ысын таянысына әүерелә. Провинция империяны һаҡлаусы легиондарҙы тулыландыра, ул башлыса ҡулланыусы булып торған Римдың сәскә атыуын тәьмин итеү өсөн һалым түләй. Император Август, М. С. Горбачевтан айырмалы рәүештә, үҙенең ҡеүәте нигеҙендә провинциялар тороуын аңлап, дәүләт бөтөнлөгөнә зыян килтермәйенсә генә провинциалдарҙың хоҡуҡтарын киңәйтә алған. Август провинцияларҙы үҙенең үҙәк бюрократияһы баш-баштаҡлығынан эҙмәэҙлекле рәүештә яҡлаған, урындағы властарҙың фекере менән иҫәпләшә белгән, һалым кимәленең ҙур булыуын законлылыҡ урынлаштырыу, иҡтисади һәм хоҡуҡи тәртипте нығытыу аша компенсацияларға тырышҡан. Тап шул юл менән ул империяның сәскә атыуына һәм үҙенең 44 йыллыҡ хакимлығына өлгәшкән".



Совет власы йылдарында Үҙәк илдең милли мәнфәғәттәренән бигерәк, коммунистик идеология ҡалыптарынан сығып эш итә. Мәскәү партия директиваларына ярашлы халыҡтар тормошон социалистик схемалар буйынса үҙгәртеп ҡорорға ниәт ҡора. Сәйәси утопияларҙы ғәмәлгә ашырыу маҡсатында тотош халыҡтар үҙ ерҙәренән ситкә һөрөлә, улар урынына урыҫтар, украиндар һәм башҡа милләт вәкилдәре күсерелә. Кешеләрҙең ғүмер баҡый ҡорған донъяларына сит-яттар хужа була. Һеҙгә нисектер, ә миңә был кәкүктең башҡа ҡош ояһына күкәй һалып, үҙ нәҫелен башҡалар иҫәбенә үрсетеүен хәтерләтә. Был икенсе төҫ алған империясыларҙың Рәсәй батшаһы Петр I "үҙ ояһы ҡошсоҡтарына" биргән наказына йөҙәр йылдар үткәс тә тоғро ҡалыуына ла ишара: "Ә басурмандарҙы, белендертмәй генә, бик тын ғына, мөмкин булғансы аҙайтырға". Большевиктар бар халыҡтарға ҡарата ошо "бурыс"ты күпкә арттырып үтәү юлдарын бик оҫта ҡулланды.

Изге тарихыбыҙ халҡыбыҙҙың бар дәүерҙәрҙә лә хәҙерге кеүек йоҡомһораған, үҙ бөйөклөгөн иҫләмәгән хәлдә булмағанын раҫлай. Юғиһә, ата-бабаларыбыҙ ике быуаттан ашыу ваҡыт дауамында үҙ ерҙәрен колонизациялау сәйәсәтенә ҡаршы сығып, үҙҙәренең тәбиғи хоҡуҡтары өсөн героик көрәш алып бара алмаған булыр ине. Улар башҡаларға бер һүҙһеҙ буйһоноусы халыҡтарҙың трагик яҙмыштары тураһында беҙҙән һәйбәтерәк белеп, төплөрәк фекер йөрөтөү ҡеүәһенә эйә булған. "Беҙ башҡалар кеүек түгелбеҙ" тигән этник императивтың, халыҡтар айырымлығының һәм сит-ят баҫымына ҡаршы тороуҙың тәбиғи принцибы булараҡ, бар дәүерҙәрҙә һәм Ер шарының бар мөйөштәрендә лә бер үк икәненә инанырға ваҡыттыр инде. Был бынан 3 мең йыл элек нисек булһа, хәҙер ҙә шулай. Башҡорт халҡы үҙ яҙмышының ошо хәҡиҡәт менән бәйле икәнен бик яҡшы аңлаған.

Һәр этнос үҙен һыйындырған һәм туйындырған тәбиғи ландшафт ҡосағында йәшәй, ошонда уның барлыҡ милли сифаттары формалаша. Беҙгә Уралдың һәм уның тирә-яғындағы тәбиғи мөхиттең иң тәүге, халҡыбыҙҙы тыуҙырыусы ландшафт булғанын төптәнерәк аңлау фарыз. "Тарих атаһы" Геродот яҙған "аргиппейҙар" нәҫеленән булып, һаман да ошо уҡ Урал ерлегендә йәшәүебеҙҙе дауам итеүебеҙ ҙә юҡҡа түгел ул: бынан киткәндәр күптән инде тарих төпкөлдәрендә юғалып бөткән. Тирә-яҡтың, ландшафттың, башҡортса әйткәндә, мөхиттең этнос менән берлегенән фәһем алырға кәрәктер. Халыҡтың тыуған мөхитен айырым инсандың аураһына тиңләп була. Фән кимәлендә был раҫланмаған хәлдә лә, ошо фекерҙән баш тартыу дөрөҫ булмаҫ. Экстрасенстар әйткәнсә, кешенең аураһы боҙолһа, уның организмында өҙлөгөү барлыҡҡа килеп, сырхай башлай. Аураға тәьҫир итеү юлы менән уны төҙәтеп, дауалау алымдары ҡулланыу тураһында ла хәҙер белмәгән кеше юҡ. Ә тотош халыҡтың аураға тиң йәшәйеш мөхите боҙола ҡалһа, милләт үҙе лә ҡаҡшай, рухи һәм физик яҡтан көсһөҙләнә, төшөнкөлөккә бирелә. Башҡорт мөхитен зарарлаусы факторҙарҙың күплеге тураһында ла әйтмәй булмай: ерһеҙ ҡалыу, ерһыуҙың, һауаның радиация һәм ағыулы химикаттар менән зарарланыуы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе үтәмәү, балаларҙың туған телен белмәй үҫеүе, ят мөхит ҡанундарын үҙләштереү, туҡланыуҙың үҙгәреүе (бигерәк тә сусҡа итен ашау), спиртлы эсемлектәр менән мауығыу һ.б. Ошоларға өҫтәп, халҡыбыҙҙың психологик тотороҡлоғоноң, эске ныҡлығының кәмей барыуын да күрмәмешкә һалышһаҡ, киләсәк алдында хилаф булыр ине. Мәҫәлән, элек башҡорт ятатҡан атын йән дуҫылай итеп ҡараған, уның ялдарын һыйпап-тарап та оло ҡыуаныс кисергән һәм йән тыныслығына өлгәшкән. Бөгөн психологик яҡтан ошо атты алыштырыр башҡа бер нәмә табылмаған әле. Һуңғы йылдарҙа ауылдарыбыҙҙа алкоголизмдың күҙгә күренеп көсәйеүе, суицид осраҡтарының ифрат күп булыуы халҡыбыҙ вәкилдәренең депрессияға тиҙ һәм еңел бирелеүен аңлатмаймы ни? Тимәк, халҡыбыҙ күптән инде психологик реабилитацияға мохтаж.

Фәндә ниҙендер киҫкен хәлгә етеү күренештәре билдәле. Киҫкен хәл оҙаҡ дауам иткәндә элекке хәл-торошҡа кире ҡайтып булмаясаҡ. Халҡыбыҙҙың матди һәм рухи торошо ла ошондай киҫкен хәлгә етеп ҡуймаһын ине, тип борсолам мин. Әлбиттә, милләт киләсәген уйлап, өгөт-нәсихәт аша ла, ғәмәли эштәр менән дә халыҡты уятыусы, алға әйҙәүсе инсандарыбыҙ юҡ түгел бөгөн. Тик ошо юҫыҡта айырым зыялыларҙың ғына түгел, дәүләт органдарында, етәксе вазифаларҙа, йәмәғәт ойошмаларында эшләгән милләттәштәребеҙҙең берҙәм һәм һөҙөмтәле эш алып барыуы фарыз.

**Людвиг ШАБАНОВ.**

БАЛАҢА УҠЫ!

# ҮҪӘРГӘН БАТЫРҘАРЫ

## Муйнаҡ ҡарт

Әбей батша заманында булған, ти, был хәл. Муйнаҡ ҡарт та, уның Ҡунаҡбай, Ҡанбулат, Яуынбай, Ҡарамыш, Ҡунаҡҡужа, Аҡбаш исемле алты улы ла батшаға әллә ни баш бирмәй йәшәгән, ти. Ырымбурға яҡын Ҡарғалы ауылынан Ахмар тигән батыр Муйнаҡ ҡартты тотоп, батшаға буйһондорорға рөхсәт ала ла Муйнаҡ ҡартҡа сапҡын ебәрә. "Мин йөҙ һалдат менән һиңә ҡунаҡҡа киләм, мине ҡаршыла. Фәлән көндә Иҫәнғол янында Эйек буйында Яһы кисеү янында булырмын", - тип яҙа Ахмар батыр.

Ахмар батыр Муйнаҡ ҡартты тотоу ғына түгел, тотош йәйләүен баҫып алырға иҫәп тота. Муйнаҡ ҡарт уның ниәтен һиҙә. Тик уландары өйҙә булмай. Осраша торған көндә лә ҡайтып етмәйҙәр. Муйнаҡ ҡарт йәйләүендәге кешеләрҙе йыйып барлай. Ун ике ҡарт, ҡалғандары - ҡатын-ҡыҙ ҙа бала-саға. Муйнаҡ ҡарт былай ти: "Ахмар минең менән күрешкәндә, эләктең бит, Муйнаҡ, тип әйтер. Шул саҡ мин Айсыуаҡ менән Орҡоя килендән "Балалар нисек?" тип һорармын. Ахмар батыр алырғап ҡалғанда, һеҙ икегеҙ ике яҡтан һөңгө менән сәнсерһегеҙ ҙә күтәреп алырһығыҙ".

Хәл тап былар уйлағанса килеп сыға. Орҡоя килен дә йылғыр булып сыға. Ахмарҙы һөңгө менән сәнсеп үргә күтәргәс, йөҙ һалдат ҡурҡышып, кире боролоп ҡаса.

Бер аҙҙан уландары ҡайта. Муйнаҡ ҡарт уларға хәлде һөйләп бирә. Улдары: "Хөкүмәт ғәскәренә теймәҫкә кәрәк булған да бит... Хәҙер ни эшләрбеҙ икән?"- тип аптырашып ултырғанда, Муйнаҡ ҡарт: "Эште мин боҙғанмын, үҙем төҙәтермен", - ти ҙә, йыйынып, батша менән осрашырға китә лә бара. Ҡаҙанға барып етә был, губернаторға инә. Хәлде нисек бар, шулай һөйләп бирә лә:"Ахмар батыр мине тотоп бирергә һүҙ биргән, бына мин үҙем килдем. Тик балаларыма теймәгеҙ", - тигән. Губернатор ҡарттың һыбайлап әллә күпме ер үтеп килеүенә хайран ҡалған. Шунан: "Муйнаҡ, беҙ һине азат итәбеҙ, старшина итеп ҡуябыҙ. Халыҡты шулай туплап тот, беҙҙең әмерҙәрҙе еткереүсе бул", - тип ҡайтарып ебәрәләр. Муйнаҡ ҡарт ҡайтып, халыҡты указ менән таныштыра. Һүрәм, Әселе, Өҫкәлек буйҙарын үлсәргә, һыуҙың мул урындарында ауылдарға нигеҙ һалырға ҡуша. Шулай итеп, Өҫкәлек буйында өс Муйнаҡ ауылы, Һүрәм буйында тағы Малай Муйнаҡ ауылдары барлыҡҡа килә. Улдарынан ҡалған нәҫелдәр әле лә йәшәй.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА**
**әҙерләне.**

**✓ *Салауат батыр үҙенең әрмеһе менән Силәбегә китеп барышлай беҙҙең Байғаҙы ауылында оҙаҡ ҡына тора. Әллә Фариза, әллә Зөләйха исемле ҡыҙҙы ҡартатайҙар уға димләй.***



# БАТЫР ДАНЫ

## йәки Салауат исеме

**Һеҙҙең Ирәмәле (Ирәмәл) тауына менеп, күк Уралдың уңғыл да суңғыл армыттарына, дарьянан да киң мөхитдаирәгә, күҙ күреме ерҙә күк ситенә барып тоташҡан урманлы үркәстәренә ҡарап торғанығыҙ бармы?**
**Ә Уй йылғаһының башын, Әңкә һырты менән Уйташ ҡаялығы биллегенән артта ҡалдырып, Әй һыуын кисеп, Ялауҙы, Ямаҙы тауҙары һәм Өрәңге араһын үтеп, Аҡтауға (Нөргөш) менгәнегеҙ булдымы? Булмағандыр. Аҡтау - Көньяҡ Уралда бейеклеге буйынса Ямантау һәм Ирәмәлдән ҡала өсөнсө урында.**
**Ә Салауат районынан Силәбе - Өфө юлына сығыу алдынан Ҡарпашауға (Кропачево) етмәҫ борон ялпан үргә менгәс, һулғараҡ күҙ йөрөттөгөҙмө? Шул ерҙән Ирәмәлгә һәм Аҡтауға тура барғанда 60-70 саҡырым булыр. Япяҡын күренеп тора. Ә Ирәмәлдән дә, Нөргөштән дә Ҡаратау һырты алда ғына ята кеүек. Салауат батырҙың тыуған ауылы Тәкәй ҙә, атаһының торағы Юлай ҙа алда ғына. Ат менеп, ихласлап юлға сыҡһаң, сабах намаҙы менән йәстү араһында юлды үтәһең дә ҡуяһың.**

### Салауат тарихы яҙылып бөтмәгән

Милли батырыбыҙ Салауаттың яҙмышына ҡағылышлы барлыҡ билгеле ваҡиғалар яҙылып бөттө кеүек. Күп китаптар сығарылды. Бөгөн Салауат тураһында халыҡ хәтерендә һаҡланған хәтирәләрҙе яҙыуы ла бик яуаплы һәм сетерекле. Илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың символына әйләнгән был шәхес образына яңы биҙәктәр, мәғлүмәттәр яҙыу уйымда бик күптәнән йөрөһә лә, баҙнат итмәнем. Мин яҙасаҡ бер ваҡиғаны раҫлаусы кешеләр әле тере сағында яҙып ҡалдырыр кәрәк тигән уй күптәнән тынғы бирмәй. Әгәр мин шул ваҡиғаға шаһит булған кешеләр һау-сәләмәт булғанда хәтирәләрем менән уртаҡлашып өлгөрмәһәм, аҙаҡ йә мәңгелеккә үкенермен, йәиһә яҙһам да, уҡыусыларым ышанмаҫ. Бөйөк кеше тураһында яҙып сығыуҙы бик яуаплы аҙым итеп иҫәпләгәнгә, үҙ шигемде милләтебеҙҙең бер Геродоты булған оло тарихсыға һөйләнем. Хупланы. "Яҙырға кәрәк, милли батырыбыҙ тураһындағы һәр мәғлүмәт әһәмиәткә эйә", - тине. Бына шуға ла баҙнат итеп, ҡулыма ҡәләм алдым. Инәйемдең инәһе Нәзифә Ибраһим ҡыҙы Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Байғаҙы ауылыныҡы. 1900 йылда Ҡорама ауылы кешеһе Сәлимгәрәй Яппархажи улына тормошҡа сыға. Уның бер туған апаһы Сафура шул уҡ Арғаяш районы Көҙәш ауылына Ҡушаевтар нәҫеленә тормошҡа бирелә. Шул ғаиләлә Башҡортостандың Үҙәк башҡарма комитеты председателе, 1937 йылда Мәскәүҙә СССР Халыҡ комиссариатында эшләгән осоронда "халыҡ дошманы" мөһөрө баҫылып атылған Хафиз бабай Ҡушаев тәрбиәләнә. Сафура ҡәртнәй (1879-1965) беҙгә, Ҡорамаға, һәр саҡ килеп йөрөнө. Бер туғаны, ҡәртнәйем (ҡартинәй) Нәзифә менән төндәр буйы һөйләшеүҙәрен беҙ ҙә тыңланыҡ. Сафура ҡәртнәй улдары Хафизды, Ҡәйүмде, Ғәзизде һәм кесе ҡыҙы Сайманы һөйләйһөйләй ҙә, ғөмүмән, Ҡушаевтар тармағын телгә алып, уларҙың оло ҡартталары (ҡартатай) Юламан бик батыр яугир булған, ул Әбей батшаға ҡаршы ир батша яҡлы булып һуғышҡан, тип һөйләр ине. Ҡарттайым Сәлимгәрәй Ҡорамшин уларға ҡушылып былай тиер булды: "Ир батша - Петр, аҙаҡ Емельян Пугачев булып киткән кешене Күңгерәү янындағы һуғыштан һуң ҡартталары Ҡужагилде Ҡоламан тигән дуҫы менән Иманһаҙ урманында өс үгеҙ һуйып, ҡымыҙ эсереп, өс көн ҡунаҡ иткәндән һуң, Алтынтамаҡ (Златоуст) яғына оҙатҡан. Урман элек бик ҙур булып, Асы йылғаһы ярына тиклем еткән. Урмандың эсендә шишмәлек һәм батҡыл бәләкәй һаҙ булған. Ҡаршыла, Аҡшишмә түпһәлендә, Бурама ауылы ултырған.

Шул мәжлестә Ҡушаевтарҙың да оло ҡартталары Юламан булып, һуңынан Ҡорамшалар менән Ҡушаевтар араһында дуҫлыҡ ебе барлыҡҡа килгән. Күрәһең, шул дуҫлыҡ ебе Арғаяш яғынан ҡарттайыма кәләш алып бирергә ярҙам иткәндер.

Унан һүҙҙе ҡәртнәйем Нәзифә дауам итә:

- Салауат батыр үҙенең әрмеһе менән Силәбегә китеп барышлай беҙҙең Байғаҙы ауылында оҙаҡ ҡына тора. Әллә Фариза, әллә Зөләйха исемле ҡыҙҙы ҡартатайҙар уға димләй. Алғанмылыр-юҡмылыр, һөйләгәндәрен онотҡанмын. Әммә ул Силәбе яҡҡа башҡа китмәй, беҙҙең тирәлә тора-тора ла, кире борола Урал яғына. Әнә шулай, Салауат батыр беҙҙең еҙнәбеҙ була яҙған, - тип кеткелдәп көлөр ине.

Бәләкәй ваҡыттан уҡ малайҙар менән уйнағанда һәр беребеҙ бер батырҙың исемен үҙебеҙгә ҡуша торғайныҡ. Мин һәр ваҡыт Салауат булып уйнағанғамылыр, уның тураһындағы һәр һүҙҙе йотлоғоп тыңлар булдым.

### Рәсми сығанаҡтар һүҙгә ялғана

Шул фекерҙе юғалтмай, инде рәсми сығанаҡтарға мөрәжәғәт итәйек. Тарих фәндәре кандидаты Инга Михайловна Гвоздикова, Салауат Юлаев тураһында барлыҡ тиерлек архив документтарын өйрәнеп, 1984 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә "Салауат Юлаев" тигән төплө китап сығарған ине. Шул китаптың 168-169-сы биттәренән өҙөктәр килтерәйек. Ваҡиғалар, Е.Пугачев Белорет, Әтәстау (Магнит), Ҡарағай, Петропавловск, Степной, Троицк крепостарын алып, һуңынан генерал Деколонг ғәскәре менән һуғышып, еңелеүгә осрағас, икенсе көндө үк Күңгерәү янында тағы ла Михельсон корпусы менән бәрелешкән мәлгә тура килә. Бына нимәләр яҙа Инга Михайловна Гвоздикова: "Пугачевтың бойороҡтарын эҙмә-эҙлекле үтәй барып, Салауат Михельсон корпусының юлына арҡыры төшә. Шул осорҙа, йәғни 1774 йылдың май аҙаҡтарында, Салауат Эҫем, Ҡатау, Һатҡы заводтары һәм Әй йылғаһы үҙәндәрендә Михельсон корпусы менән байтаҡ бәрелешә. Күрәһең, ул Троицк яғынан кире Уралға боролған Пугачевҡа ҡаршы Михельсон корпусын ебәрмәҫкә ҡарар иткәндер..." Артабан Инга Гвоздикова былай яҙа: "Салауатта баш күтәреүселәрҙең төп ғәскәренә яңы көстәр өҫтәп ебәреү тураһында хәрби коллегияның указы булғандыр". Ә һуңынан әсиргә төшкән Василий Каташев үҙенең Салауатта хеҙмәт итеүен, Пугачев ғәскәренең 1774 йылдың 21 май көнө Троицк ҡәлғәһе янында генерал Деколонг менән һуғышында ҡатнашыуын иҫкә ала.

Хәрби коллегияның Салауаттан һәм Белобородовтан өҫтәмә һорауы һөҙөмтәһе булып, Белобородовтың Өрәңге тауы, Әй һыуы, Ялпантау аша төшөп, Яйыҡты кисеп, Учалы аша Пугачевҡа Магнит ҡәлғәһе тирәһендә, ә бәлки, Науруҙ ауылы янында ҡушылыуы дөрөҫ фараздыр. Сөнки Белобородовтың Троицк яғында булған һуғыштарҙа ҡатнашыуы билдәле.

Михельсон менән бәрелештәрҙән һуң Салауат бер аҙ көс туплау менән мәшғүл булғандыр. Улар бер-береһен юғалта. Артабан И. Гвоздикова ни яҙа?

"Салауат Эҫем заводынан Ҡатау заводына бара, ләкин уны яндырып өлгөрә алмай. Күрәһең, бында ул төп ғәскәргә ярҙамға барырға бойороҡ алғандыр. Һәм ул Пугачевҡа ярҙамға көнсығышҡа, Силәбе яғына ынтыла. Пугачевты Силәбе тирәһендә осратырға ниәтләһә лә, килеп сыҡмай. Байғаҙы ауылы янына еткәс, алға алғасҡылар ебәреп, үҙе туҡтап ҡала, күрәһең. Пугачев был ваҡытта Троицкиҙан тура Күңгерәүгә (Кундравы) килеп, Михельсон менән һуғыша. Ә Салауат Пугачевтың Күңгерәү янындағы һуғышын һуңлап ишетеп, шунда уҡ Һатҡы заводы яғына ташлана. Юлда өҫтәмә көс туплай. Златоуст һәм Һатҡы тирәһендә Пугачев менән осрашыу ниәте була".

Артабан И. Гвоздикова бына нимә яҙа: "Пугачев, уны эҙәрләп барыусы Михельсон командаһынан айырылып, үҙенең ҡалған ғәскәре менән башҡорт ауылдары аша Златоустҡа, унан Һатҡы заводына китә... Салауат ул осорҙа Михельсон күҙенән берсә юҡ булып китә, берсә яңынан килеп сығып, дошманына ныҡ ҡына удар яһай. Баш күтәреүселәр язалау отрядтарына һөжүм итә, почтаны ҡулға эләктерә..." (168-се бит).

И.М. Гвоздикова Пугачев менән Салауат Юлаевтың башҡорт ерендә тап ҡайҙа һәм ҡасан осрашыуҙары тураһында сығанаҡтарҙа асыҡ мәғлүмәттәр юҡ, тип белдерә (171-се бит).

Һорау алғанда Пугачев Күңгерәү янындағы һуғыштан һуң башҡорт ауылында булыуын иҫләй. 2 июнь көнө Пугачев Һатҡы заводын үртәй. Шул уҡ көндө кис Әй йылғаһы буйында Салауат Пугачевтың 900-гә яҡын кеше иҫәпләнгән отрядын үҙенең 3 мең атлы ғәскәре менән ҡаршы ала. 3 июндә Ҡыйғы ауылы янында Михельсон менән һуғышта Пугачев та, Салауат та ҡатнаша. Беҙ бер-беребеҙҙе еңә алмай айырылдыҡ, тип күрһәтә һуңынан Пугачев был һуғыштың һөҙөмтәһен.

Күрәһең, Салауаттың Михельсон күҙенән юғалып тороуы уның Байғаҙы ауылы яғына Пугачевҡа ынтылған ваҡытына тура киләлер. Салауаттың Байғаҙы ауылына килеүе һәм разведкаһының Пугачевтың ҡайҙа булыуын белгәнгә тиклем унда ҡалыуының ике сәбәбе бар кеүек. Хәҙерге Арғаяш районы Байғаҙы ауылы Исәт провинцияһының Әйле олоҫо. Был - бер. Тимәк, ул таныслыраҡ булыр, тип үҙ ырыуы вәкилдәренә килгән. Икенсенән, Әйле олоҫо старшинаһы Байғаҙы Көҙәмешов - Пугачев яҡлы йөҙлөктәр башлығы. 1778 йылда Юлай Аҙналин рус армияһында йөҙ башы сифатында көнсығышҡа ҡалмыҡтарҙы баҫтырырға барғанда йорт старшинаһы Көҙәмеш менән бергә булып, яҡындан танышлыҡтары күренә кеүек. Һәр хәлдә, кире Һатҡыға, хәҙерге Мейәс ҡалаһының төньяғынан Биҙәртау, Имантау (Ильмен) үренән үткән. Башҡаса юл юҡ.

### Сәбәбе сығып тора

Инде был хикәйәтте яҙыуға сәбәпсе булған ваҡиғаларға күсәйек.

1974-1975 йылдың ҡышы ҡарһыҙ килде. Ҡара һыуыҡтар ҡоро ер өҫтөн сатрашлап-сатрашлап ярҙы. Яҙ килде. Сәсеү ваҡыты етте. Бер тамсы ла ямғыр яуманы. Яуым-төшөмгә өмөт бағлап, саң туҙҙырып, саң йотоп, ун мең гектар самаһы ергә бөртөклөләр һәм мал аҙығы үҫемлектәре сәстек. Көҙҙән сәсеп ҡалдырылған ужымға ла өмөт бағлай инек. Ул осорҙағы мин эшләгән хужалыҡ, районның төньяғында 29 ауылды берләштереп, уның өстән бер өлөшөн тәшкил итә ине. Сәсеү үтте. Бер тамсы ямғыр төшмәне. Йәй эҫе килде. Яҙғы әҙ-мәҙ генә еүешлекте эсеп үҫкән үләндәр ҙә июль айында һарғайып ҡатты, япраҡтары ҡойолоп төштө. Тау башындағы ҡайын ағастары ҡайһы короно, ҡайһы япраҡтарын ҡойҙо. Сәскән ашлыҡ йә бөтөнләйгә сыҡманы, йә зәғиф булып, уңыш бирер кимәлдә булманы. Ваҡ йылғалар, көсһөҙ шишмәләр ҡороно, күлдәр һайыҡты. Хужалыҡ малдарына ҡайҙа урманда япраҡ һепереп йыйып, ҡайҙа миндек бәйләп, ҡышҡылыҡҡа мал аҙығы әҙерләүҙә барлыҡ халыҡ әүҙем ҡатнашты. Республика һәм район етәкселеге сит өлкәләрҙән, республикаларҙан һалам әҙерләү тураһында ҡарар ҡабул итте. Шулай итеп, бөтә Башҡортостан, Силәбе, Ырымбур һәм башҡа өлкә хужалыҡтары илдең төрлө тарафына юл алды. Беҙҙең хужалыҡ Украинала, Латвияла һәм Эстонияла һалам әҙерләне. Эстонияның Вильянди районында эш ойоштороу минең бурысыма әйләнде. Районыбыҙҙың башҡа хужалыҡтары эшселәре килгәнгә тиклем урындағы етәкселәр менән килешеү, аҙыҡ дәүмәлен билдәләү, ҡыҫып беректереү, тимер юлға ташыу, Рига ҡалаһына барып, Балтика тимер юл управлениеһынан вагондар һорап алыу, эшкә киләсәк эшселәргә йәшәү шарттары тыуҙырыу һәм башҡа бик күп эштәр иңгә төштө. Әйтергә кәрәк, Башҡортостандан ғына булыуыбыҙ өсөн Эстония үҙәк һәм Вильянди ҡала-район етәкселеге беҙгә бик ҙур ярҙам ҡулы һуҙҙы. Һаламды үҙҙәре ҡыҫып беректерҙеләр, үҙ машиналары менән тимер юл вокзалына ташыныլар.

Минән һуңғараҡ "Коммунар" колхозынан Талипов Нуретдин һәм "Ҡыҙыл партизан" колхозынан Кәримов Тәлғәт тигән иптәштәр етәкселегендә бригадалар килде. Эш ойошторып, көндәр бер-бер артлы үтә торҙо.

Бер көндө эштән һуң әҙ генә ял итеп, кәңәшләшеп алыр өсөн кафеға керҙек. Уларҙа тәртип Рәсәйҙәгенә ҡарағанда бөтөнләйгә башҡаса тойолдо. Хеҙмәтләндереү, аш-һыу, кешеләрҙең тәртибе, таҙалыҡ, бөхтәлек һәм башҡа эске тәртиптәр байтаҡ айырмалы. Йыуан, ауыр ғына кәүҙәле ике ерҙәшемдең фиғеленә иғтибар итепме, әллә үҙ-ара ярайһы уҡ ҡысҡырып башҡортса һөйләшеү тартыпмы, беҙҙең янға дүртенсе булып ҡаҡсараҡ кәүҙәле эстон кешеһе рөхсәт һорап килеп ултырҙы. Аш-һыу-

✓ ***Салауат һәр саҡ ярға сығып, таш өҫтөндә тороп, үҙ телендә йырлар булған, тип һүҙен йомғаҡланы тарих уҡытыусыһы. Эстондың был һүҙҙәренә иҫебеҙ-аҡылыбыҙ китеп, ни әйтергә лә белмәй шаҡ ҡаттыҡ.***



# – мәңгелек,

## эстон хәтерендә лә йәшәй

ын күсерҙе. Беҙ үҙебеҙсә һөйләшеүҙе дауам итәбеҙ. Күрәһең, һөйләшеү телендә урыҫ һүҙҙәре лә ысҡынып китәлер. Ултыра торғас, был эстон ярайһы уҡ һөрөнмәле урыҫ телендә беҙҙең ҡайҙан, ни өсөн килеүебеҙҙе һораны. Башҡортостандан, тигәс, ултырған ултырғысынан тороп китеп, ҡул биреп беҙҙең менән күрешеп сыҡты ла, һүҙҙе туп-тура Салауат Юлаевҡа борҙо. Үҙе шул Вильянди ҡалаһының бер урта мәктәбендә тарих уҡыта икән. Тарихтарына, ерһыу атамаларына бәйләп, Салауат Юлаев, уның көрәштәштәре, Башҡортостан тигән ил һәм башҡорттар тураһында балаларға һөйләй икән. Ә үҙе тере башҡортто күргәне булмаған.

Ул саҡта йәш, кәүҙәгә ирәбе, тулы һынлы тере башҡорт ирҙәренә ҡарап, һәр өс-биш минут һайын ҡул һуҙып күрешеп ризалығын белдерә, беҙҙең илтифатлыҡты маҡтай ине. Ултыра торғас, ул бик етдиләнеп: "Һеҙ әле белмәйһегеҙ Салауат батырығыҙ бында Палдиски ҡалаһын шведтарҙан азат итеүен, ә беҙ беләбеҙ", - тип һөйләргә ризалыҡ алғас, һүҙен дауам итте.

### Эстон кешеһенең һөйләгәндәре

Салауатты урыҫтар тура ғына Палдискиға килтермәгән. Ул кемдәрҙер менән иң башта Таллиндың Тоомпеа крепосы эсендә тәрән ер аҫты соҡор зинданында ултыра. Бығаулы әсирҙәрҙе соҡорға зиндан өҫтөндәге тишек ҡапҡас аша арҡан менән төшөргәндәр. Төшөрөр алдынан ҡалын таҡтаға тимер сынйырҙар менән беркеткәндәр. Шулай ҙа улар бында оҙаҡ булмай. Рогервикка алып китәләр. Эш бик ауыр була, таш ҡутаралар. Крепоста ваҡыты-ваҡыты менән мең, унан да күберәк каторжан булһа ла, аслыҡтан һәм ауырыуҙан күбеһе үлеп бөтә. Тере ҡалған ҡолдар сиркәү, крепость стеналарын, порт төҙөүҙә, таш ташыуҙа ҡулланыла. Ауырыуҙарҙы, ғәриптәрҙе, һаҡсылар алдында ғәйеплеләрҙе бығаулап һыуға ташлап үлтергәндәр. Бының өсөн айырым ҡоҙоҡ тотҡандар. Көндәрҙән бер көн крепосҡа шведтар һөжүм итә. Портты, караптарҙы ваталар, яндыралар, емерәләр, хәрби гарнизондың күбеһен юҡ итәләр. Ҡолдарҙы бығауҙарынан ысҡындырып, шул бығауҙар менән тере ҡалған гарнизон һалдат-офицерҙарын бығаулап караптарына тултыралар ҙа, крепость ҡалаһы кешеләрен таларға тотоналар. Бығауҙарҙан ҡотолған каторжандар, шведтарҙың ҡаланы талауға китеүенән файҙаланып, карапҡа бәреп инә лә, килтерелгәндән бирле үҙҙәрен язалаған бығаулы язалаусыларын караптан диңгеҙ төбөнә бәреп бөтә. Караптарын баҫып алған каторжандарҙы трюмдарға тултырып алып китергә ниәтләнгән швед командаһы менән ҡолдар араһында ҡул һуғышы китә. Ҡолдар үҙ-үҙҙәрен аямай һуғыша. Еңелеп, үлемдән ҡасып барған шведтар караптарына ултырып, саҡ-саҡ ярҙан ситкә йөҙөп, ҡасып ҡотола. Был һуғыш менән Салауат һәм уның Иван тигән дуҫы етәкселек итә. Батшабикәгә прошение яҙалар. Тиҙҙән Эсляндия губерна үҙәгенән өҫтәмә көс килеп, каторжандарҙы бик ҡаты туҡмап, тағы ла бығаулап, эшкә ҡуша. Ә Салауат менән Иванды муйындарынан эт кеүек итеп таш стенаға сынйырлап ҡуялар. Батшабикәгә хат йә етмәй, йә уға хат һөҙөмтәһен икенсе төрлө итеп еткерә һарай вельможалары, тип фаразлай уҡытыусы. Әммә бер аҙ ваҡыт үтеүгә Иван менән Салауаттан башҡаһынан бығауҙарын һалдыралар. Ә Салауат менән Иванды (Иван Почиталин булғандыр) стенанан ысҡындырһалар ҙа, бығауҙарын һалмағандар. Бөтәһе лә көслө ҡарауыл аҫтында таш ҡутарыу һәм таш эшен дауам иткән. Йылдар артынан йылдар үткән. Бер ваҡыт Әбей батша үлде, тигән хәбәр килгән. Ҡыуанышҡандар. Хәҙер инде яңы батша хатты уҡыр ҙа беҙҙе ҡотҡарыр тип өмөтләнгәндәр. Әммә яңы император Екатеринаның улы Павел Беренсе ҡолдар яҙмышын уйламай ҙа. Ул ваҡытта Павел Беренсенең Франция һәм Англия менән ғауғалашып йөрөгән осоро була. Көнбайыш илдәр Рогервик портында Рәсәй үҙенең флоты өсөн караптар төҙөй икән тип уйлаған... Ямғырлы төндә һис бер атыуһыҙ билдәһеҙ эскадра портҡа якорь ташлап, крепосты баҫып ала. Был шул ун йыллыҡта икенсе ваҡиға була крепосты баҫып алыу. Төндә йоҡоло гарнизонды тиҙ генә баҫалар. Губерна үҙәгенә хәбәр ебәрмәҫ өсөн, ҡыуғын почталарҙы тотоп бикләйҙәр. Ашыҡмайҙар. Ҡала халҡына баҡыр, көмөш, алтын әйберҙәренә контрибуция һалалар. Өс караптың икеһенә бик күп дары, ҡурғаш, тимер әйберҙәр, крепостың бөтә пушкаларын тейәйҙәр. Әлбиттә, быны бығауҙан ысҡындырылған ҡолдарҙан эшләтәләр.

Таланған әйберҙәр тейәлеп бөткәс, китергә йыйыналар. Шул саҡта уларҙың бер карабында янғын башлана. Көслө янғынға караптағы дары сапсаҡтары шартлай башлай. Янғын күрше карапҡа тоҡанып, ул да шартлап янып китә. Икенсе карапты ла ҡотҡарып алыу мөмкинлеге булмағанлыҡтан, өсөнсө, әле яна башламаған караптарына тейәлеп ҡасмаҡсы булалар. Китә ығы-зығы. Крепость ҡоралын бер аҙ йәшереп алып ҡалған ҡолдар менән килгәндәр араһында ҡул һуғышы башлана.

Ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәгән ҡолдар оҙон мылтыҡлы сит ил һалдаттарының ҡаршылығын тиҙ һындыра. Улар, караптарына тейәлеп, ярға төкәлгән траптарын алып өлгөрә. Был һуғышта үлемесле яраланып, Салауаттың дуҫы Иван йән бирә. Салауат та, ҡартайған атаһы ла ауыр яра ала. Был һуғышты ла Салауат һәм уның дуҫы шул уҡ Иван етәкләй. Салауатты элек һәр саҡ һөйләрҙәр ине. Ул бит бер ваҡытта ла үҙ ҡарашын үҙгәртмәгән. Рухи әсирлектә булмаған, пленға төшмәгән! Быныһы бер. Икенсе баһа уға шул. Батша уны һәм уның көрәштәштәрен ни тиклем ауыр язаға дусар итмәһен, ул һаман да сит кешеләрҙе сит күргән. Сит карапҡа ултырып китергә лә мөмкинлеге булған. Унда барыбер был тиклем ҡоллоҡ кисермәҫ ине. Тыуған иленә тоғро булып, уны ташлап китә алмаған ул.

Аҙна-ун көн үтеүгә, Петербургтан ҡоралды көстәр килеп, крепоста үҙ тәртиптәрен урынлаштыра. Ауыр яралыларҙы, йөрөй алмағандарҙы махсус ҡаҙылған тәрән ҡойоға, һыуға ташлайҙар. Салауат әле тере ҡала. Ҡанлы яралары булһа ла, таш ҡутара, таш ташый. Әммә сей яралар һаҫый, боҙола башлай. Боҙолоуы ҙурайғандан-ҙурая, күрәһең. Аҙаҡ эшкә ярамағандыр. Үлеме билдәһеҙ. Бығаулап һыуға ташлап үлтерелгәнме? Әллә сей яралар ҡарайып, тәненә таралғанмы?

Салауат һәр саҡ ярға сығып, таш өҫтөндә тороп, үҙ телендә йырлар булған, тип һүҙен йомғаҡланы тарих уҡытыусыһы. Эстондың был һүҙҙәренә иҫебеҙ-аҡылыбыҙ китеп, ни әйтергә лә белмәй шаҡ ҡаттыҡ. "Ҡайҙан билдәле һеҙгә был мәғлүмәттәр?" - тип һораным. "Минең прадедтар ҙа шул тирәлә булған. Аҙаҡ яллап крепость өсөн балыҡ тотҡандар. Һуңынан крепость янында бер киҫәк кенә ергә хужа булып донъя көткәндәр. Күрәһеңме, беҙ хәҙер балыҡ тотмайбыҙ, улар кисергән тарихты кире халыҡҡа һөйләйбеҙ. Бына хатта һеҙҙең ҡарттайығыҙ Салауаттың да тарихын һөйләп ултырам. Унан башҡаны ла мин бик күп беләм", - тине.

### Мәғлүмәт уйландырҙы

Был мәғлүмәткә ышанырғамы-юҡмы, тип ерҙәшем Кәримов Тәлғәт, дуҫым Талипов Нуретдин менән байтаҡ ваҡыт ултырғас, өҫтәл артынан торҙоҡ. Ваҡиға мине шул тиклем шаҡ ҡатырҙы, хатта тарих уҡытыусыһының исем-шәрифен дә яҙып алырға уй килмәгән.

Шул йылдарҙан алып был ваҡиға һәр саҡ күңелде өйкәне. Яҙып сығырға уйлаһам да, йә изге һынға, изге шәхескә тап төшөрөрмөн, йә был хәлдәр яҙылған башҡа сығанаҡ ҡағыҙ юҡ, тип уйландым. Йәнәһе, ҡайҙа һинең таяныстың? Шуныңса әҫәрҙең шуныңса бите, тип эстондың һүҙҙәрен дәлилләй алмайбыҙ беҙ өсәүләп тә. Әммә уның һөйләгәнен үҙебеҙ дәлилләй алабыҙ. Әлегә беҙ бар, беҙ тере.

1989 йылда Салауаттың тыуған төйәгендә үткәрелгән байрамға саҡырылған инем. Тарих фәндәре докторы Виктор Сидоров үҙенең "По следам Салавата" тигән китабын миңә яҙып бүләк иткән ине. Виктор Сидоров Эстонияның Тарту һәм башҡа архивтарында эҙләнеп, Салауаттың үлеме һәм башҡа материалдар табып, китапҡа баҫтырған шәхес. Рогервик крепосындағы ҡолдарҙың яҙмышын билдәләп, төрлө йылдарҙағы ваҡиғаларҙы яҙа ла былай тип дауам итә: "Остановлюсь лишь на одном эпизоде, имевшем место в 1790 году. Иностранные государства предполагали, что в Балтийском порту происходит постройка новых судов. Особый интерес в этом вопросе проявили шведы. 6 марта в 11 часов утра два небольших шведских фрегата "Ярмарс" и "Улверст" бросили якоря на рейде Балтийского порта. Под прикрытием корабельных орудий шведы высадили десант 50-60 человек и овладели крепостью. Комендант крепости полковник де Роберти совершенно растерялся и бездействовал, хотя крепость имела 40 орудий. Шведы заклепали все крепостные орудия, сожгли три казенных склада и несколько судов, ... захватили большое количество пороха, свинца и других припасов... На другой день в 4 утра шведы покинули Балтийский порт" (стр. 42).

Унан һуң дауам итә: "Возникает вопрос, а что в это время делали каторжники? Ведь они могли быть свидетелями происходивших событий, и, кто знает, может быть, в связи с этим у них появилась надежда на спасение". 1797 йылғы "статейный список"та Салауат Юлаев, Иван Почиталин, Ҡәнзәфәр Усаев һау, тик Юлай Аҙналинды ғына ҡарт, цинга менән ауырый һәм яралары бар, тип күрһәтелеүен яҙа Виктор Сидоров.

Виктор Сидоров үҙенең шикләнеүҙәрен былай дауам итә: "Такие случаи еще раз наводят на мысль, что нужно продолжить работу в Тартуском и других архивах, внимательнейшим образом изучить имеющийся материал и новые фонды. Упорная, кропотливая работа поможет нам узнать новые подробности пребывания пугачевцев на каторге в Рогервике".

Салауаттың поэзияға бай нескә күңеле үлер алдынан да ғәзиз инәһе, ҡатыны, балалары өсөн өҙөлөп янғандыр, мәңгелек һағыш, мәңгелеккә күңеле зарлы булһа ла, тормош бүләк иткән наҙлы йәндәргә лә мәңгелек мөхәббәтен юғалтмағандыр:

Зөләйха, һин ергә ингән хур ҡыҙы,
Күҙҙәреңдә балҡый Зөһрә йондоҙо.
Күҙҙәрең, гүйә, төндәге күк йөҙө,
Яҡтыра шул күҙҙәреңдә ай үҙе.

Ошо шиғырында ҡыҙ-ҡатындың булмышы аша уға ғына һөйөү, уға ғына мөхәббәт тоймайым мин. Бында - барлыҡ донъяға, барлыҡ йыһанға бөтмәҫ-төкәнмәҫ мөхәббәт сағылышы.

Күгәреп күккә үрелгән
Ҡарлы башын Уралдың,
Күҙҙең яуын алырҙай
Матурлығын ҡырҙарҙың
Мәңге маҡтар инем мин,
Мәңге данлар инем мин.

Салауаттың был шиғри һүҙҙәре миңә уның Ҡаратау ҡаяларынан көньяҡ-көнсығышта күренгән аҡ башлы Нөргөш, Ирәмәл, Ямантау армыттарына ҡарап һоҡланып, инанып, күкрәге моң менән тулған сағында тыуған еренә бөтмәҫ-төкәнмәҫ һөйөүе емешелер кеүек тойола. Ышанам, тәрән ышанам быға!

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**Учалы ҡалаһы.**

✔ *Иң хайран ҡалдырғаны аҡса тураһында яҙылғаны булды. "Бар йыйған аҡсаны өйҙәге мейестең ташы аҫтына һалғанмын. Ул аҡса өлкән киленем Юлдыбаева Хәмиҙә Мирсәйет ҡыҙына тәғәйен".*






Зифа ИСҠУЖИНА-ҒӘҘЕЛШИНА

# ӘРЕМ БӘЙЛӘМЕ
(Хикәйә)

Бер ауылда, барыһына ла үрнәк булып, матур итеп донъя көткән, ти, әбей менән бабай. Уларҙың бар тапҡан таянғаны хәләл булған. Әбей ҙә, бабай ҙа бик егәрле булған, иртә таңдан ҡара кискә тиклем эшләгән улар. Мал көткәндәр: һарайҙарына барып инһәң, уҫтаптай еленле, буралай нығ өс һыйыры, эргәһендә быҙауҙары, арыраҡ үтһәң, аҡлы-ҡаралы әллә күпме кәзә-һарығы, ә инде ялан кәртәгә сыҡһаң, ике тайы, ике бейәһе ҡолондары менән тора, ти. Ихатала ҡаңғылдашып ҡаҙҙары, таҡта менән бүленгән араның икенсе яғында әтәсе менән иҫәпһеҙ-һанһыҙ тауыҡтар тора икән.

Таң һыҙылыу менән солан ишегенең биген асып, йәштәр һымаҡ нығ баҫып, бабай сыға өйҙән. Йәше туҡһанға етеп барғанға әйтәләрҙер уға бабай тип, ә былай ул бер ҙә бабайға оҡшамаған - типһә тимер өҙөрҙәй ир кеүек. Ул йәһәт кенә тәһәрәт ала һалып, өйөнә кире инеп, иртәнге намаҙын уҡый. Шунан тағы тышҡа сыға. Ашыҡмай ғына тупһанан төшә, донъяһын байҡай. Бар нәмәһе үҙ урынында, шөкөр, бөтөн ерҙә тәртип хөкөм һөрә. Бабай сөйҙә элеүле торған йүгәнен, сыбыртҡыһын алып, аттары янына ашыға. Ялан кәртәгә барып екке бейәһенә атланып, кәртә артындағы башмаҡтарын иҫке баҫыуға ҡыуа.

Шул ваҡытта әбейе сыға урамға. Быныһына ла әбей тип әйтеп булмай, уны илле биш йәштәрҙәге ҡатын тип әйтергә була. Тупһала торған ҡомғанын ҡулына эләктереп, тәһәрәт алырға юллана, кире килгәс, эйелә һалып урынында ятҡан ҡаҙ ҡанатын алып, тупһаһын һепереп тә ҡуя.

Ул да өйгә инеп намаҙын уҡый һалып сыға ла, ҡоймаға түңкәрелгән күнәктәрен беләгенә эләктереп, һәүкәштәрен һауырға һарайға инеп китә. Тегеләре хужабикәһен күреү менән тотоналар кемуҙарҙан мөэлдәргә, йәнәһе, иң беренсе мине һау, иң беренсе мине һау. Өйрәтелгән тәртип буйынса, өйрәнелгән хәрәкәттәр менән әбей күҙ асып йомған арала һыйырҙарын һауып бөтә. Уңарсы булмай, бабайы ҡайтып етә. Әбей, һөт тулы ике күнәген әүеҫлек аҫтына элеп, быҙауҙарын әсәләренә ҡуша. Улары, ҡойроҡтарын болғай-болғай, тубыҡланып тороп, әсәләренең елененә морондары менән йәнтәслим төртә-төртә, ауыҙҙарынан һөт күперектәрен ағыҙа-ағыҙа, бар донъяһын онотоп, рәхәтләнеп имә башлай.

- Ғәйнислам, Семәрҙең быҙауының эсе китеп торасы, һыйырҙарҙы ҡыуғас, әрем алып ҡайтырһың әле, - әбей бабайына бөгөнгө көндә беренсегә һүҙ ҡуша.

- Бер ыңғай күберәк алып ҡайтырмын, йыл әйләнәһенә етәрлек итеп, - тине лә ҡарт, быҙауҙарҙы әсәләренән айыра башланы.

- Йә улайһаң , һөттө сәйҙән алда тартырмын.

- Үҙең беләһең, - тине лә һүҙгә һаран бабайы, атына менеп, һыйырҙарҙы көтөүгә ҡыуып та китте.

Бабайы артынан ҡапҡаны һәйбәт итеп япты әбей, шунан быҙауҙарын һарай артындағы кәртәләнгән аҡланға ҡыуып сығарҙы. Бынау эсе киткән быҙауы, әсәһенең ҡуйы һөтөнән ауырығанын аңламай инде, һаман имгеһе килеп, әбейҙең янбашына мороно менән төртә.

- Иии, бөҙрәкәйем, ҡойроҡ аҫтың бысранып йөрөгәнде белмәйһеңдер, һаман имергә һорайһың. Әйҙә, бар, иркенгә сығып уйнаҡлап ал, йонсоп китмәҫ борон, - тип иркәләне әбей, - бабай оҙаҡламаҫ, һиңә дарыу алып ҡайтыр.

- Ҡош-ҡортто асһаң, ыуаҡ малды сығарғанда аяҡ аҫтында сыуалышып алып китәләр, әле иртә, - тип, үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә, һөтлө күнәктәрен алып аласыҡҡа юлланды әбей.

Өҫтө күбекләнеп торған йылы ғына һөттө сепаратор аша йәһәт кенә айыртып алды әбей. Ҡаймағын һыуытҡысҡа ҡуйып, айыртылған һөттөң бер биҙрәһен төбө майланған ҡаҙанға ауҙарҙы, ҡайнатып, ҡатыҡ ойотор, икенсеһен, ҡош-ҡортҡа булыр, тип, аласыҡ соланындағы әрһеҙ биҙрәгә ҡойҙо. Ҡаҙанының аҫтына ут тоҡандыра һалды ла, күмер төшкәнсе тип, сепаратын йыуып ҡуйҙы. Ғәҙәттә, улар бабайы менән һөт тартырҙан алда уҡ иртәнге сәйҙе эсеп ҡуя торғайнылар.

- Әй, әттәгенәһе, сәйхур ғына бабайым, һыуһап ҡына йөрөй микән? Юҡҡа ҡуштым үҙенә әрем йыйырға, - тип әйтеп тә өлгөрмәне, йөрәген берәү ҡуш усына алып ҡыҫтымы ни, яман итеп ауыртып ҡуйҙы. Аһ-аһ, был ни ғәләмәт, йөрәк сирен онотоп та бөткән ине, тағын башларға уйлай микән? Ауыртыуы баҫылғас, йөрөп ҡараны әбей, ебәрҙе, шикелле.

Ҡайнап сыҡҡан самауырын борҡотоп, теүәсәйен баҫты ла, ихатаға сыҡты әбей. Урам ҡапҡаһын асып ҡуйҙы. Шулай итмәһәң, кәзә-һарыҡтары һарай ишегән асыу менән ихата буйлап тырым-тырағай һибелә, уларҙы йыйып алырмын тимә, ә былай, тыңлаулы ғына туп-тура барып асыҡ ҡапҡанан сығып китәләр. Әле лә, ыуаҡ малын сығарып, уларҙың өйҙәренән алыҫ булмаған көтөүгә барып ҡушылғанын ҡарап торҙо ла әбей, боролоп, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, бергилке бабайының ҡайтырға тейеш яғын ҡарап торҙо. Юҡ, күренмәй. Үҙенең күңеле яман болоҡһоно. Ошо болоҡһоуға ла нығ асыуы килде әбейҙең, сөнки тигенгә түгел был. Бабайы ла әйткәне бар уға, үҙе лә тикшергән - күңеле урынында түгел икән, бер алама хәл көт тә тор. Хәйерлегә булһын инде.

Ҡапҡаһын ябып, әбей инде ҡош-ҡорто торған келәткә табан атланы. Хужабикәләренең аяҡ тауышы ишетелеү менән ҡаҙҙары ҡаңғылдаша, тауыҡтары ҡытҡылдаша башланы. Келәттең ишеген асыуға, иң беренсе үҙ баһаһын төшөрмәй, әкрен генә баҫып, ата ҡаҙ килеп сыҡты. Уның артынса, бәпкәләре менән өс инә ҡаҙын, суҡышмаһындар өсөн, айырым бикләгән ояларынан сығарҙы әбей. Ата ҡаҙ ҡыуаныстан, түңкәреүле ятҡан тимер тастың өҫтөнә менеп китеп бейей хатта. Ә инәлектәре, ярарға тырышыпмы, муйындарын һоноп ҡаңҡылдығы сығып өйөрөләләр эргәһендә. Айырылып тороп ҡушылған ҡаҙҙарҙың ҡыуанысына күҙе ҡыҙып ҡарап торҙо әбей. Үҙенең бәпкәләре үҫеп таралышып бөттө инде, хәҙер үҙҙәре өләсәй-олатайҙар.

- Әсәй, көтмәгеҙ инде шул хәтлем мал менән ҡош-ҡортто, икегеҙгә генә ауыр бит, - тиһәләр ҙә балалары, тыңламай әбей менән бабай, ғүмер баҡый шулай өйрәнгәндәр улар. Нисек инде, бынау бәпкәләрҙең һинең менән бипелдеге сығып һөйләшкәнен ишетмәйенсә, быҙауҙарҙың күҙ ҡыуандырып, һикереп китеп уйнаҡлағандарын күрмәйенсә йәшәргә була?

Тауыҡтарын да асып сығарып, ем һипте әбей. Ҡаҙҙарына ашарға һалып, яман итеп ҡарҡылдаған ҡарға тауышына башын күтәреп ҡараһа, унынһы ҡапҡа башында ултыра икән.

- Уй ҡороғор, нимә теләп унда ҡарҡылдап ултыраһың? - Әбей бар көсө менән киҙәнеп, ҡулындағы таяҡты ҡарғаға ташланы. Ҡыу таяҡ, ҡапҡаға барып ҡаҡлығыуға, ҡош осоп китте. Былай ҙа эсе бошоп йөрөгәндә, был ҡарғаһы ни икән, тип асыуы килде әбейҙең.

Бабайы тиҙерәк ҡайтһа икән. Артҡы ҡапҡа яғында ат тауышын ишетеп, әбейҙең йөрәгенә йылы йүгерҙе, ынтылып ҡарағансы, саҡ артына йығылып китмәне - ат яңғыҙы ине.

- Атаҡ-атаҡ, был бабай ҡайҙа йөрөй икән, - тип үҙалдына һөйләнә-һөйләнә аты янына барһа, унынһының эйәр ҡашағаһына ҙур ғына әрем бәйләме элен-гән. Тояҡтары лысма тупраҡ, был ни хәл, батҡаҡҡа баттылар микән? Атҡа яҡыныраҡ килеп, яңылыштан ғына күҙҙәренә ҡараһа, мөлдөрәмә тулы күҙ йәштәре яңағы буйлап аға ине. Ниндәй генә хәлдәрҙә лә тыныс ҡала белгән әбейебеҙ сеңләп илап ебәрҙе.

- Эй, малҡайым, һөйләшә белһәң, аңлатыр инең ни булғанын, -әбей иламһырап, аттың башынан һөйҙө. Яулыҡ остарына күҙ йәштәрен һөрттө лә, атын ялан кәртәгә индереп ҡуйҙы. Үҙ-үҙендә бөтөрөү менән бер ниҙә эшләп булмаҫ, бабайҙы эҙләп сығам, тигән ҡарарға килде ул .

Ауылдың икенсе осонда йәшәгән улына барып ғауғаламай ғына хәлде аңлатты ла, улының ун биш йәшлек ейәнен эйәртеп, йылға буйына китте.

Бына бабайының йөрөгән аяҡ эҙҙәре, иртәнге ысыҡтан һуң асыҡ беленә, әбей шулар буйынса барып йылға ярына килеп етте. Бында атына һыу эсерҙе, ти, эсергәс, ҡайтырға тейеш тә инде, тип уйлап та өлгөрмәне күҙ алдына малҡайының тояҡтары килеп баҫты - улар бит лысма тупраҡ ине. Әбей бейек ярҙың ишелгән урынына текәлде лә ҡатты.

- Өләс, өләсәй, ҡартатайым ошонда тип уйлайһыңмы? - тип берҙе генә һораны ла һиҙгер малай, йән-фарман ауылға табан йүгерҙе.

Күпме ваҡыт үткәндер, өлкән улы ейәне менән йүгереп килеп еткәндә, сәсе-башы туҙған әбей баштан-аяҡ ҡап-ҡара булып, бабайының ярты кәүҙәһен тупраҡтан соҡоп сығарған ине.

- Ҡартатайым, - тип килененә оҡшап күңелсәк ейәне илай башлағайны, әбей ҡырыҫ ҡына:

- Ҡартатайың илағанды яратмағанды беләһең, нишләп илайһың? Тым! - тип тыйып ҡуйҙы. - Илнур, балам, бар, атты егеп алып кил йәһәт кенә, - тине әбей тыныс ҡына. Һыуынып та өлгөрмәгән бабайын көскә күтәреп арбаға һалыуға, ауылдан бер төркөм кешеләр килеп етте, улар араһында туғандары, фельдшер менән участка милиционеры ла бар ине.

Арба башында ултырған әбей ҡәҙерле кешеһененең башын алдына һалған да, сикәләренән һыйпай-һыйпай ниҙер һөйләй. Иртәнсәк кенә йүгереп йөрөгән икәүҙең береһе йәнһеҙ тәңгә, икенсеһе, ысынлап та, һикһәнде үткән әбейгә әйләнгәйне был саҡта.

Өйҙәренә ҡайтыуға өлкән килендәре килеп еткән ине. Ҡәйнәһененең уң ҡулы булған ҡатындың иңенә был юлы ла бар эш төштө. Уның ире әбей менән бабайҙың бөтөн Рәсәй буйлап һибелгән үҙенән тыш туғыҙ балаһына аталары менән булған ҡайғыны кеҫә телефонынан шылтыратып хәбәр итте. Атаһын ерләү мәшәҡәттәрен дә үҙ өҫтөнә алды.

Ишек алдына ауыл халҡы тула башланы, өйгә мулла һәм бер нисә аҡһаҡал инде.

Үҙенең дә, бабайының да һуңғы көнөнә тип әҙерләп һалып ҡуйған кәфенлектәрен, кәрәк-яраҡтарын мәйетте тәрбиәләргә тип ингән ирҙәргә тапшырҙы ла, әбей тышҡа сыҡты. Яҡында йәшәгән ҡыҙҙары килеп еткән, тупһаға ултырып шым ғына илайҙар, әбей уларҙың янына ултырҙы. Ә ҡапҡа бер туҡтауһыҙ асылды ла ябылды, асылды ла ябылды.

Өлкән кешене, етмәһә, йәйҙең эҫе көнөндә оҙаҡ һалып ҡуйыу килешмәҫ, тип, кәңәш иттеләр ҙә, бабайҙы мәрхүм булғандың иртәгәһенә үк ер ҡуйынына тапшырҙылар. Мәрхүмдең гүр эйәһе булыуына ике көн үткәс, өсөн, унан һуң етеһен уҡыттылар. Ете тәүлек элек һин дә мин йөрөгән әбей танығыһыҙ булып үҙгәрҙе. Ҡайғырғанын кешегә күрһәтмәҫкә тырышһа ла, күренеп тора - йөҙөн хәтһеҙ-һанһыҙ йыйырсыҡтар телгеләне, күҙҙәрендәге нур һүнде, бөтөн кешене аптыратып ошоға ҡәҙәр ҡап-ҡара булған сәстәре ап-аҡҡа мансылды. Бер кемдең дә был донъяға мәңгелеккә килмәгәне мәғлүм дә, тик былай ҡыйын булыр, тип кем уйлаған.

Аталарының етеһен уҡытырға тип йыйылған балаларына таралмаҫҡа ҡушҡайны әбей. Әле бына кис етте. Күмәкләшеп, һарай тулы малды яптылар ҙа аласыҡҡа киске сәйгә ултырҙылар. Сәй эсеп бөткәс, әсәләре һүҙен башланы.

- Балалар, бар донъяның тотҡаһы булған атайығыҙҙан һуң күп тормам инде, ул-был хәл була ҡалһа тип, барығыҙҙы ла йыйҙым әле...

Ҡыҙҙары, улдары уны кемуҙарҙан йыуатырға тотонғайны, ул:

- Рәхмәт һеҙгә, тик үҙегеҙ белеп тораһығыҙҙыр, мине йыуатыр өсөн йыймағанды. Тағын бер тапҡыр рәхмәт әйтәм, беҙ үлмәҫ борон мал бүлешеп йөрөмәгәнегеҙгә, - әбейҙең йыйырсыҡлы битенән эре йәш тамсылары тәгәрәне, - нишләйһең, донъя бит, ана, күрше Фәүзиә әбейҙе генә алығыҙ - үҙе бар көйөнсә балалары емерелеп барған өйөнә талашалар, аниһә шул өйҙө йүнәтеп бирһәләр, - ҡулдарын теҙенә һалып, башын аҫҡа эйеп, әбей арыуыҡҡа тынып ҡалды. Йөрәге нығ ауыртһа ла, балаларына күрһәтмәҫкә тырышып, шулай ултырҙы ул. Бер яҡ кеҫәһенән күҙлеген, икенсе яғынан бер бит ҡағыҙ сығарҙы.

-Атайығыҙ яҙып ҡалдырған васыятнамәне уҡып ишеттерәйем, - тине лә, ҡағыҙға текәлде, - үҙемдә уҡығаным юҡ хатта, уның ғәҙел булырына шул хәтлем нығ ышандым...

Барыһы ла тынып ҡалды. Васыят ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп яҙылғайны. Әйтерһең, бабай үҙе һөйләй. Балаларының береһен дә ҡыйырһытмаған, береһен дә ситтә ҡалдырмаған. Иң хайран ҡалдырғаны аҡса тураһында яҙылғаны булды. "Бар йыйған аҡсаны өйҙәге мейестең ташы аҫтына һалғанмын. Ул аҡса өлкән киленем Юлдыбаева Хәмиҙә Мирсәйет ҡыҙына тәғәйен". Ҡағыҙҙағы был һүҙҙәрҙе уҡығас, килене:

- Юҡ, ҡәйнәм, ала алмайым аҡсаны, уңайһыҙ бит, - тине баҙнатһыҙ ғына.

- Нимәһе уңайһыҙ, ти, был ҡайныңдың һуңғы теләге, уны үтәмәү - ҙур гонаһ. Тик иң алда ул аҡсаны табыу

кәрәк, - тип аласыҡтан өйгә инеп китте әбей, артынан балалары эйәрҙе .

- Мейес аҫтындағы ташты табыр өсөн баҙға төшөр кәрәк, - тип, өлкән улы баҙҙың ауыҙын асып төшөп тә китте. Күп тә үтмәй, бер төргәк тотоп килеп сыҡты.

- Әй, иҫемә төштө, бабаҡайым пенсия алған һайын бер тинен дә тотонмайынса, һалып ҡуя торғайны шул , унан һуң баҙға кәрәкһеҙ-ниһеҙ төшөп йөргәнен берике тапҡыр күргәйнем дә, уны кем уйлаһын аҡса йыйып йөрөй тип, - шулай һөйләнә-һөйләнә төргәкте тағатты әбей, - бына, килен, риза булып ал, күпме бар шунынса аҡсаны. Изгелегендә күп күрҙек бабай менән, Хоҙай Тәғәлә һинең үҙенә лә килендәреңдең мәнфәғәтен күрергә насип итһен, - тигән һүҙҙәр менән тапшырҙы өлкән килененә аҡсаны әбей.

Барлыҡ балаларына ла үрнәк булып торған бабайҙың рухын хөрмәт итеп, әсәләренә лә ихтирам күрһәтеп, йыйылған туғандар бер ҙә низағлашманы, хатта өлкән еңгәләренең ҡулында күпме аҡса булыуы менән дә ҡыҙыҡһынманы. Өлкән килен аҡсаны алдына һалып, ике усын битенә яҡын килтереп, доға уҡыны.

- Алла бирһә, ҡайнымдың изге рухына аяттар бағышлармын, йыл һайын йыйылыҡ уҡытып торормон, рәхмәт, - ҡатындың күҙ алдына ҡайныһының үҙе килен булып төшкән сағы килеп баҫты - йәш кенә ҡыҙға ҡарата аталарса сабыр ҡыланды, аҡыллы кәңәштәре менән һәр ваҡыт ярҙам итер ине, хатта ҡәйнәһенә ҡарағанда яҡыныраҡ була торғайны, мәрхүмең.

Өрмәгән ергә ултыртмай балалары әбейҙең, ни теләй, шуны эшләп, ауыҙына ғына ҡарап торалар ҙа ул, шулай ҙа уның бабайы менән икәүҙән-икәү ҡалғыһы килә ине. Эйе, бабайы китмәгән бит әле, һаман уны көтөп йөрөй алдан һөйләшелгәнсә. Алай ҙа ғына балалары әсәләрен йоҡларға бимазаламайыҡ, тип, өйҙә бер үҙен ҡалдырып таралыштылар. Башы яҫтыҡҡа терәлеп, күҙен йомоу менән хәтирәләргә сумды әбей...

Ғәлимә менән Ғәйнислам ун бала табып үҫтерҙе. Ир кешенең әсәһе үлеп ҡалып, атаһын үҙҙәренә алғайнылар. Ҡартатай кеше һуғыштан алып ҡайтҡан яралары нығ һыҙлауға ҡарамаҫтан, хужалыкта ярҙам итер, ейән-ейәнсәрҙәрен ҡарашыр ине. Ҡанаттары ҡайырылған аҡҡош һымаҡ йөрөгән ҡайныһына ҡарап, Ғәлимәнең йөрәге һыҙлап торғайны. Бер көн кис йоҡларға ятҡас:

- Ҡайныма ҡыйындыр инде яңғыҙына ғына, - тигәйне иренә, унһын һәр ваҡыттағыса ҡыҫҡа ғына итеп:

- Ни хәл итәһең, донъя бит, - тине.

- Әй, Хоҙайым, фани донъяларҙан беребеҙ иртәрәк китеп, икенсебеҙ оҙаҡ йөрөмәһен ине. Ҡартайғансы бергәбергә тигеҙ йәшәп, бер мәл дә генә үлһәк ине, - тип ҡуйғайны ул ваҡытта Ғәлимә. Теләген шулай нығ теләгәнме, әллә Хоҙайҙың амин тигән сағына тура килгәнме шул көн килде. Үҙенең хәлен үҙе белә әбей, дарыуҙарын эсеүҙе туктатыу менән килгән ҡайғыны йөрәгенең күтәрә алмаҫын.

Йылғаның яры ишелеп, тупраҡ аҫтында ҡалған бабайын тапҡас та әбей:

- Ғәйнисламҡайым, бабаҡайым, бер үк ғәфү ит инде, шул әрем тигән булып, һинең башыңа еттем. Йәнекәйем, әйтә алһаң, ни хәл итәһең, донъя бит, тиер инең, юҡ шул, һуң инде. Бер үтенесем бар - яңғыҙымды оҙаҡ йөртмә, тиҙерәк яныңа ала һал инде, - тип теләк теләне. Ул ваҡытта ла, әле үҙенең түшәгендә ятҡанда ла шул теләктә ҡалды әбей.

Ут янып торған алғы яҡтың ишегенән тауыш-тынһыҙ ғына бабайы килеп инде. Ул яҡынайған һайын әбейҙең былай ҙа ауыртҡан йөрәге шартлар сиккә етеп дарҫ-дөрҫ тибә башланы.

- Әйҙә, Ғәлимә, - тине янына килеп бабайы. Ҡыҫҡа һәм аңлайышлы, һәр ваҡыттағыса.

*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

# ХАЛҠЫМ ҮҘЕ ЛАЙЫҠ БЫҒА

**Гәзитебеҙ "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" тип аталған бик матур конкурс иғлан итте. Ҡыҙыҡһынып, һоҡланып уҡып барам. Тик иртән иртүк телевизор аша "Сәләм" тапшырыуын мин генә түгел, күптәр ҡарай алмайҙыр тим. Был фәһемле матур конкурсты күрһәтеүҙе "Сәләм" тапшырыуының ял көндәгеһенә күсереп булмаймы икән, тип һорағы килә.**

Мөғжизәләрҙе уҡып барам да шуны тоям: улар тәбиғәт һәм халҡым сифаттарына үрелеп, сорналып бара, бер-береһенән айырылғыһыҙ. Шуға ла Ер йөҙөндә башҡорт тигән халыҡ йәшәүе - үҙе бер мөғжизә, тип фекер йөрөтәм мин. Саф башҡорттоң холҡон, рухын һүҙҙәр менән генә һөйләп бөтөрөрлөк түгел бит ул.

Ул - йомарт, ҡунаҡсыл, ябай, эскерһеҙ, баҫалҡы, шул уҡ ваҡытта батыр, илһөйәр. Ә ниндәй рух байлығына эйә! Шулай булмаһа, ҡобайырҙар, эпостар, оҙон-оҙон көйҙәр ижад итә алыр инеме беҙҙең ата-бабаларыбыҙ! Уның вәкилдәренең әле һаман рухи байлыҡтарыбыҙҙы түкмәйсәсмәй яңы быуынға тапшыра барыуы, илһөйәрлек һиҙатының бер ҡасан да һүрелмәй балҡып-янып тороуы, тамырҙарын байҡап, шәжәрәләрен тәҙөүҙе ҙур баһаға лайыҡ. Ул бер илде лә баҫып алырға ынтылмаған, тик үҙ илен, үҙ иркен ҡурсалап ҡорбан булған. Бер милләт алдында ла үҙ милләтен өҫтөнөрәк тип иҫбат итергә ынтылмаған, тик дуҫлыҡ ҡулын һуҙған башҡортом.

Күптәрҙең ауылдарында, үҙ ғаиләләрендә атайҙарының ҡурай моңдарына, әсәйҙәренең халыҡсан йырҙарына сорналып, бөүелеп үҫеүҙәре хаҡында гәзит биттәрендә яҙған иҫтәлектәрен уҡып, көнләшеп тә ҡуям. Моңдар, хистәр ҙә мул бирелгән уларға, милли һыҙаттарҙан да айырылғыһыҙ булып үҫкәндәр. Ә бына беҙ, һуғыш йылдарында тыуғандар, балалар йорттарында-интернаттарҙа пионер, комсомол булып:

"Һуҡ барабан, һуҡ барабан, Тра-та-та! Тра-та-та!" - тип йырлап үҫтек. Башҡортлоҡ хисен 5-се синыфта уҡығанда тәрән тойоуым иҫемдә ҡалған. Йәйгеһен үҙебеҙҙең дача ялы асылғанда ҡунаҡҡа Рамаҙан Йәнбәков саҡырылғайны. Беҙ уҡып йөрөгән 9-сы башҡорт мәктәбен тамамлағайны ул да. Апайҙар һорағас, Рамаҙан ағай Ҡариҙел йылғаһы ярына баҫып йырлап ебәрҙе. Әллә бик яҡын баҫып тороп тыңлағанға, әллә йырсының илаһи моңонан, ҡан хәтеремдә боронғолоҡ хисе уянды. Усаҡтар яғылған, тирмәләр ҡоролған быуаттарға осоп ҡайтып китеү хисен тойҙом. Бөтәһе лә таныш, бөтәһе лә яҡын, үҙеңдеке. "Ошо боронғолоҡ хисе хәтерҙә нисек һаҡлана икән?" тип уйланып йөрөнөм һуңынан. Бына шулай, кескәй ҡыҙыҡҡайҙы тетрәндереп, башҡортлоғомдо уятҡан Рамаҙан ағайға ғүмерем буйы рәхмәтлемен. Башҡортлоғомдо тойоу көслә, ауырлыҡтарға бирешмәҫ, рухлы итте мине. Ҡан хәтеренә дан, тип әйтәһе генә ҡала.

Ә шулай ҙа әлеге глобалләшеү тип аталған замаңға күҙ һалһаң, хәүефләндерә. Йәштәрҙең таҡмаҡтан да ҡыҫҡа, бер юллыҡ һүҙҙәрҙе 45 тапҡыр ҡабатлап йырлауға күсеүе үҙ иленә, үҙ теленә, үҙ моңона битарафлыҡ тәрбиәләмәйме икән, тим. Топ, реп музыка, гел һикереп-ырғып бейеү, аҡ кейеҙгә теләһә ниндәй абстракт һүрәттәр йәбештереү...

Ғалим әйткәнсә: "Гиганттарҙың иңендә баҫып тороу ғына яңы асыштар яһарға ярҙам итте". Шуның һымаҡ, тарихыбыҙҙы, үткәндәрҙе өйрәнеү генә байыта һәм яңы асыштар яһарға ярҙам итә беҙгә - шуны онотмайыҡ.

**Шулай итеп, Башҡортостандың тағы бер мөғжизәһе тип башҡорт халҡын атар инем. Хәтеремдә, Зәйнәб Биишеваға "Халыҡ яҙыусыһы" тигән исемде биреү тантанаһы бара ине. Юғары, матур һүҙҙәрҙе тыңлап бөткәс, мәшһүр романист - яҙыусы, шағирә Зәйнәб Биишева апай: "Иң мөһиме, халҡыбыҙҙы ололап ҡул сабайыҡ!" - тип әйтеп, алҡыштарҙан һуң халҡына баш эйҙе. Эйе, баш эйерлек, ғорурланырлыҡ халҡыбыҙ бар бит беҙҙең.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**



Әбйәлил һабантуйында.

# ОҘОН КӨЙГӘ ТАУЫШ БИРӘЙЕК

**"Киске Өфө" гәзите менән "Сәләм" ижад берекмәһе иғлан иткән "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсына үҙемдең тәҡдимдәремде яҙып ебәрергә булдым.**

Беҙҙең атай Ибраһимов Изахетдин Фәйзулла улы бик матур итеп йырлай торғайны. Күптән мәрхүм булып ҡалһа ла ауылдаштары һаман уның йырлағанын иҫкә төшөрә.

Илленсе йылдар. Яҙҙан-көҙгәсә, урып-йыйыу тамамланғансы алһыҙялһыҙ эш. Көҙгө эштәр тамамланғас ҡына халыҡ бер аҙ тын алып ҡала. Халыҡтың эштән, ауыр тормоштан ял итеп ала торған мәле. Шуға ла һуғымдар һуйылып бөткәс, көҙгө байлыҡта өйҙән-өйгә саҡырышыуҙар китә. Эштән арыһып, күнел асалар - был мәжлестәр ҡыш буйы дауам итә. Мәжлес үткәреп ебәреүҙе һәр өй хужаһы үҙенең бурысы һанай. Кис, эш бөткәс, кәрәсин лампаһы яҡтыһында йыйылалар. Ҡунаҡтарҙы башлыса ит, һурпа, әсегән бал менән һыйлайҙар. Әммә, әлегесә, иҫереп, болғанлап йөрөгәндәр юҡ. Гармунсы, мандолинасылар саҡырыла, уларҙы уйынсылар тип йөрөтә торғайнылар. Йыр ҙа бейеү, бейеү ҙә йыр. Ирмәктәрен һаман да иҫләйем. Мәжлестәрҙә оҙон көйҙәр, йыраусылар күп ине.

Атай совхоз малдарын көттө. Көмәс тауы башындағы маяҡтан бик алыҫтарға тиклем матур күренеш асыла, бөтә донъя ус төбөндәгеләй. Тау башында, таш аҫтынан урғылып сығып ятҡан һыуыҡ һыулы Тамъян шишмәһе, битләүҙәрҙә аяҡ баҫҡыһыҙ ер еләге, урманына керһәң - бөрләгәне, ҡарағаты, сейәһе... Моңо бар кеше йырламай нисек түҙһен инде! Тауыш бит ул йырлаған һайын асыла. Атайым да оҙон көндәр буйы тауҙарҙа, иркендә, саф һауала йырлап йөрөгән.

Ул ваҡытта бесән әҙерләү ҡул көсө менән башҡарыла торғайны. Көнө буйы бесән сабып, энерҙә ҡайтып барабыҙ. Урман юлынан ҡайтып еткәнсе атҡа атланған атай оҙон көй һуҙып килә.

Хәтерләйем: бер ваҡыт Уран ағай Ильясов беҙгә ҡура эшләште. Ялға туктай ҙа: "Изахетдин ағай, әйҙә, "Малбай"ҙы йырлап ал әле", - тип атайҙы йырлата. "Һинең аҡсаң кәрәкмәй миңә, тик йырла ғына. Яратам мин йырҙы, тик үҙем йырлай белмәйем бит", - ти. Эйе, беҙҙең Ильясовтар нәҫелендә барыһы ла йырлай торғайны.

Йырҙарҙы атайым күп белде. "Урал", "Сибай", "Шәүрә килен", "Сәлимәкәй", "Малбай", "Томан" - һанап бөкөһөҙ. Әммә үҙе фольклорсылар килеп сыҡһа, аралашып барманы. "Тикшереп йөрөйҙәрҙер", - тип ҡул һелтәй торғайны. Әлеге шул репрессия шауҡымы инде. "Дошман" яһарға ғына тороуҙарынан бизрәп бөткәйне бит кеше.

Атайҙың тауышы олоғайғанда ла көслә, таҙа булып ҡалды.

"Ҡәләм тотоп яҙайым бер-ике юл,
Янып барған йөрәккә ял булыр ул.
Ҡәләм тотһаң, ҡәләм изгегә тартыр,
Ҡәләм тотҡан әҙәмдең зиһене артыр", - тип көйләп ултырыр ине.

Ул 74 йәшкә етте. Эшһөйәр булды. Һалымына, шелтәгә ҡарамай, гел ат аҫраны. Ат егеп, әсәй менән Златоуҫка, Миәскә ит һатырға йөрөнөләр. Ҡайҙа барһа ла башҡорт йырҙары яҙылған пластинкалар алып ҡайта ине. Атайым ғәрәп яҙмаһын да уҡый белде. Уны ерләгәндә әсәйем һарғылт ҡағыҙға яҙылған доғаны "Уҡый белә ул, уҡып ебәрер", тип һөйләнә-һөйләнә күкрәгенә япты.

Оҙон көй, халыҡ йырҙарының һәр береһендә тарих ята, ул халыҡтың күңел хазинаһы, моңо, тел, тарих һәм башҡа ҡабатланмаҫ үҙенсәлектәрен йыйған хазина. Халыҡ үҙенең аһ-зарын йырға һалған. Башҡорт йырҙан айырылмаған, йыр уға ҡайҙа ла юлдаш булған. Башҡортостандың ете мөғжизәһенең береһе, һис шикһеҙ, башҡорт моңо булырға тейеш.

**Талибә ДӘҮЛӘТШИНА.**
**Учалы районы Ҡарама ауылы.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ЕРГӘ ҠАРА ЛА...

## үҙ сағылышыңды күр

Беҙгә әле мәктәп партаһы артында ултырғанда уҡ "Майлы сүлмәк тышынан билдәле", тип, дәфтәр-китаптарыбыҙҙы таҙа йөрөтөргә, өҫ һәм аяҡ кейемдәребеҙҙе һәр ваҡыт тәртиптә тоторға өйрәтә килделәр. Ысынлап та, кейемең затлы булмаһа-булмаһын, әммә бөтөн, таҙа һәм үтекләнгән булыуы фарыз. Шулай уҡ ҡиммәтле йыһаздар менән тулған бысраҡ йортҡа ҡарағанда, яҡшы итеп йыйыштырылған бөхтә өй һәр ваҡыт ҡот, нур, йылылыҡ бөркә. "Кейем-һалымығыҙҙы бына тигән итеп таҙа тотоғоҙ, кеше араһында саф һауа кеүек булығыҙ", тип әйтелә Хәҙистәрҙә лә.

Быларҙы мин әле республикабыҙ оло байрамдарҙы ҡаршылағанда еребеҙҙең ҡыйралып ятыуын күреп гәрләнеүҙән яҙам. Бөтә тирә-йүн сүпсар менән сыбарланған бит, һоҡланып ҡарар бер генә таҙа урын юҡ. Мин был осраҡта һис кенә лә урам йыйыштырыусыларға ғәйеп ташларға йыйынмайым. Улар үҙ эштәрен һәр ваҡыт намыҫлы башҡара. Беҙ иртән эшкә барырға сыҡҡанда улар эш өҫтөндә була инде.

Әйткәндәй, урам йыйыштырыусы һөнәре физик яҡтан да, мораль яҡтан да ауыр эш һанала, бер кемгә лә кеше бысрағын йыйып йөрөү ләззәт килтермәй. Шуға күрә лә, миңә ҡалһа, бөгөн улар үҙҙәренә арнап ҡуйылған һәйкәлгә түгел, ә беҙҙең ихтирамға мохтаж. Беҙ был ихтирамды үҙебеҙҙең артыбыҙҙан таҙа эҙ ҡалдырып күрһәтә алабыҙ. Тик ни өсөндөр беҙ Ер-әсәбеҙ өҫтөнән атлап йөрөгәнгә рәхмәтле булыу урынына, уны бысратабыҙ, ҡыйлайбыҙ, түкөрәбеҙ һәм башҡа ғәмәлдәр башҡарабыҙ. Нисек итеп ер күтәрәлер был тиклем мыҫҡыллауҙы! Иң ғәжәпләндергәне шул: урам тулы ашамлыҡ ҡалдыҡтары: ул һут һауыттары булһынмы, тундырма, чипсы, арахис һәм башҡа ялтыр-йолтор ҡыштырлаҡ ҡаптар тиһеңме - һәммәһе етерлек. Ярай әле, һыра, араҡы һауыттарын йыйып, аҡсаға тапшырырға була, юғиһә, быяланан күп әйбер булмаҫ ине.

Әйтерһең дә, кеше был донъяға ашау өсөн генә яралтылған. Иртән торғандан алып, кис ятып киткәнсе бер туҡтауһыҙ тамағын ҡайғырта ул, шулай итеп ул ерҙе генә түгел, нәфсеһен тыя алмайынса, кәрәкмәгән аҙыҡ менән үҙен дә бысрата. Хайуандар ғына ашап йөрөй, артынан ҡойолтоп йөрөй. Беҙгә Аллаһы Тәғәлә, хайуандарҙан айырмалы рәүештә, аң биргән, аҡыл биргән, тик беҙ ҡайны саҡта Аллаһ рәхмәтенә тоғро була белмәйбеҙ, хайуани заттан да түбән тәгәрәйбеҙ.

Мин бер иртәлә генә йәшәгән йортомдан яҡындағы туҡталышҡа барып еткәнсе 25 тәмәке ҡабын иҫәпләнем, был күҙгә салынғандары ғына әле. Ә тәмәке төпсөктәре, әйтерһең дә, махсус рәүештә сәсеп сығылған. Әгәр ҙә улар үҫемлек орлоғо кеүек булһа, донъяны тәмәке үләне баҫып алған булыр ине. Ҡалабыҙҙың ошо хәлдә ҡалыуына урамдарҙа сүп-сар һауыттарының аҙ булыуы ла сәбәпселер, тим. Мин транспорт сараһынан төшөп ҡалам да, билетымды ҡайҙа ташларға белмәй, эшкә барып еткәнсе ҡулымда уйнатып барам. Шул бәләкәй генә ҡағыҙ остоғо бармаҡ остарында тәгәрәтеүҙән хатта юҡ кимәлгә барып етә, әммә ырғытып китергә намыҫ ҡушмай...

**Шулай итеп...**

**Кешеләрҙең ергә шундай түбән мөнәсәбәттә булыуы күңел бысраныуҙан, рухи бушлыҡтан киләлер, тим. Беҙ нәфсебеҙгә хужа була алмайынса, күпселек физик ихтыяжыбыҙҙы ҡәнәғәтләндереү менән генә булабыҙ, матди байлыҡ артынан ҡыуабыҙ. Һәр нәмәлә: ашауҙа, эсеүҙә һәм башҡа донъяуи эштәрҙә сама белергә кәрәк, тип өйрәтә Ислам дине. "Әҙәм балаһының бер баҙ малы булһа, шул баҙ эргәһендә икенсеһе булыуын да теләр. Икеһе лә тулы булһа, өсөнсөһөнә тотонор. Әҙәм балаһының ҡорһағы тупраҡтан башҡа бер нәмә лә тултыра алмай. Тәүбә итегеҙ. Тәүбә итеүселәрҙең тәүбәһен Аллаһ ҡабул итә", тип әйтелә Хәҙис Шәрифтә. Ватандаштарым, тәүбә ҡылайыҡ, һәм үҙебеҙҙе һәм еребеҙҙе нәжестәрҙән таҙартайыҡ, йөрәгебеҙҙе һәм һауабыҙҙы сафландырайыҡ, донъябыҙға ҡот ҡайтарайыҡ!**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ

**"Кәмселекһеҙ кеше булмай" - бөтәбеҙгә лә билдәле әйтем. "Кешегә хаталаныу хас" - был осраҡта мосолманға ла ташлама юҡ, сөнки был хәҡиҡәтте Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис сәләм дә дәлилләгән: "Бөтә кешеләр ҙә хаталана". Аллаһ илсеһе гонаһлы булып ҡалмаҫҡа, ә тиҙерәк тәүбә итергә ҡуша: "Һеҙҙең арала хаталаныусыларҙың иң яҡшыһы - тәүбә итеүсе". Ул тәүбә итә белеүселәргә Аллаһтың рәхмәте сикһеҙ һәм ишектәре киң асыҡ икәнлеге тураһында хәбәр итә. Яҡшы мосолман үҙенең хатаһын тиҙерәк төҙәтергә ашығасаҡ. Ҡайны берәүҙәрҙең үҙенең хатаһын күрә белмәйенсә, башҡаларҙы тикшереүе - ысын мосолманға бөтөнләй хас түгел.**

# ҒӘФҮ ИТӘ БЕЛӘҺЕҢМЕ?

Мосолмандың мөһим сифаттарының береһе - "төҙәтә белеү". Камиллашыу юлынан атлаған саҡта ул яңылыш аҙым эшләмәҫкә, әгәр ҙә эшләһә, тиҙ арала хәлде яҡшы яҡҡа үҙгәртергә тырыша.

Мосолман үҙенең гонаһтарын бер ҡасан да әһәмиәтһеҙ тип һанарға тейеш түгел, сөнки Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис сәләм әйткән: "Мосолман үҙенең гонаһтарын өҫтөнә ишелеп төшөргә торған тау кеүек күрә. Үҙенең гонаһтарына өйрәнгән кеше уны танауы осона ултырған себен кеүек күрә". Бер һүҙ менән әйткәндә, яҡшы мосолман бөтөнләй хаталанмаған кеше түгел, ә үҙенең хаталары өсөн ғәфү үтенә һәм ғәфү үтенеү юлдарын эҙләүсе.

Кеше - ул ижтимағи-мәҙәни ысынбарлыҡ. Ул бөтә нәмәгә лә тиҙ өйрәнә, йәмғиәт тормошо менән йәшәй ала, кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттәр ҡора ала. Ғәфү үтенә белеү тәү ҡарамаҡҡа ябай күренһә лә - кешенең мәҙәни һәм ижтимағи тормошҡа ҡарағанлығының бер күрһәткесе ул.

Түбән ҡатламда эшләүселәр генә түгел, ә бөтәһе лә, хатта дәүләт үҙе лә ғәфү үтенергә тейеш. Беҙ йыш ҡына ҡасандыр ғәҙелһеҙ рәүештә хөкөм ителгән кешеләрҙең исемдәрен, хөрмәт күрһәтеү һәм ғәфү үтенеү маҡсатында, тарлә майҙандарға, биналарға ҡушыуҙарын күрәбеҙ.

Ғәфү үтенеү - үҙеңде түбән төшөрөү түгел, киреһенсә, был ғәмәл кешене юғары күтәрә һәм үҫтерә. Был осраҡта беҙгә үҙенең гонаһһыҙлығы, хаталарҙан ҡаса белеүе, кешеләргә ҡарата әҙәплелеге, иғтибарлы булыуы менән билдәле булған Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис сәләм өлгө булып тора. Бер вәғәзе ваҡытында ул халыҡ төркөмөнә ҡарап былай тип мөрәжәғәт иткән: "Әгәр ҙә мин һеҙҙең кемегеҙҙе булһа ла һуҡһам - бына минең арҡам, һуғығыҙ; әгәр ҙә мин кемегеҙгә булһа ла бурыслы булһам, бына минең мөлкәтем, килеп алығыҙ". Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙенең кемгәлер ҡарата мөмкин булған иғтибарһыҙлығы өсөн шулай әҙәпле генә ғәфү үтенгән.

Шулай булғас, ғәфү үтенә белеү нимәнән ғибәрәт һуң? Был беҙҙең тормошҡа ниндәй мәғәнә бирә? Иң беренсе сиратта, был - кешенең үҙен аңлауы. Был бөтә кешеләрҙең дә, шул иҫәптән беҙҙең дә хаталаныуыбыҙ мөмкин икәнде һөйләй.

Бүтәндәрҙән үҙеңде өҫтөн күреү тойғоһон кисереү яҡшы түгел. Үҙеңдең уйламаған аҙымың өсөн яҡыныңдан ғәфү үтенеп, беҙҙә киләсәктә был хатаны ҡабатламаҫҡа тигән теләк уяна. Ғәфү үтенеү ғәҙел булырға, шулай уҡ башҡаларҙың ҡәҙерен белергә һәм хөрмәт итергә өйрәтә. Кемдән ғәфү үтенгәнһегеҙ, шул иғтибар һәм хөрмәт ҡаҙана. Үҙенә булған хөрмәтте күреп, ул әңгәмәсеһенә шулай уҡ яуап бирәсәк. Шулай итеп, тупаҫ ҡылыҡтарыбыҙ өсөн ғәфү үтенергә көс табып, беҙҙең һәр беребеҙ үҙенә икенсе күҙлектән ҡарай, башҡа кешеләргә хөрмәт итергә өйрәнә, һәм шуның менән йәмғиәт тәртибенә нигеҙ һала. Шулай уҡ, Аллаһ Тәғәләнән ғәфү үтенеү һәм тәүбә итеү - беҙҙең динебеҙҙең бер ҡағиҙәһе. Раббыһынан ғәфү үтенә белеүсе мосолман кешеләрҙән дә ғәфү үтенә белә. Беҙ, әлбиттә, кемдер төкөп китһәк, йә бысратһаҡ, аяғына баҫһаҡ ҡына ғәфү үтенеп өйрәнгәнбеҙ...

Үҙеңдең ғәйебеңде танымау - беҙҙең дәүерҙең етди ауырыуы. Кешеләрҙе был ауырыуҙан ҡотҡарыр өсөн күп көрәшергә тура киләсәк.

**Шулай итеп...**

**Үҙенең дини бурыстарын тулыһынса үтәмәгән иманлы кеше - Аллаһтан;**

**Һайлау алдынан биргән вәғәҙәләрен үтәмәүсе сәйәсмәндәр - халыҡтан;**

**Хөрмәт күрһәтә белмәүсе бала - ата-әсәһенән;**

**Мираҫты тигеҙ бүлмәүсе һәм атабабалар аманатын һаҡламаусы ейән - олатаһынан;**

**Яратмағаны һәм хөрмәт итмәгәне өсөн ире - ҡатынынан;**

**Ата-әсә әҙ иркәләгәне өсөн - балаларынан;**

**Эш хаҡын түләмәгәне өсөн директор - эшсеһенән;**

**Тупаҫ түрә - хеҙмәткәренән;**

**Әҙерлекһеҙ дәрес биргән өсөн уҡытыусы - уҡыусыһынан;**

**Тәкәббер студент - уҡытыусыһынан һәм үҙен шәхес итеп күрергә теләгән башҡа кешеләрҙән;**

**Ғауғалы пассажир - әйләнә-тирәһендәге кешеләрҙән;**

**Тупаҫ шофер - пассажирҙарҙан;**

**Ғәҙел булмаған һатыусы - һатып алыусыларынан ғәфү үтенергә тейеш.**

**Әйтеп киткәнебеҙсә, үҙеңдең хаталарыңды танымау һәм ғәфү үтенә белмәү - етди рухи ауырыу. Шайтан да бит үҙенең ғорурлығы арҡаһында Аллаһы Тәғәләгә ҡаршы килә һәм ҡарғыш ала. Беҙгә уның юлынан барыу тыйылған. Шулай булғас, әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең хаталарҙан ҡасырға тырышайыҡ. Әгәр ҙә яңылыш ҡына ғәҙелһеҙлеккә юл ҡуйһаҡ, тиҙ арала ғәфү үтенәйек.**




# "ҺӘФТИӘГЕ" БЫУА БЫУЫРЛЫҠ...

## тик "Әфтиәк" тигәне генә юҡ



Мин инде нисәмә йылдар буйы китап магазиндарынан мосолмандарҙың дини китабы "Әфтиәк"те эҙләйем, әммә ошоғаса уны осрата алғаным юҡ. Шул уҡ ваҡытта татар телендә нәшер ителгән "Һәфтиәк" китаптары быуа быуырлыҡ. Ни өсөн ошо китап башҡорт телендә баҫылмай? Минең "Әфтиәк" китабын үҙ телемдә уҡығым килә, ә башҡортса дини китаптарҙы көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә, табырлыҡ түгел. Тукай урамындағы мәсет магазиныndамы, башҡаһындамы - барыһында ла тик татар телендәге дини китаптар ғына һатыла. Өмөт итеп, "Сәләм" магазинына барһам, унда ла шул уҡ хәл. Һатыусыларҙан һорағаң, улар башҡортса дини китаптарҙың бөтөнләй баҫылмауына һылтана.

Ни өсөн шулай килеп сыға һуң, йәмәғәт? Әллә беҙгә башҡорт телендә дини китаптар нәшер итеү өсөн айырым рөхсәт йә ҡарар ҡабул итергә кәрәкме ни? Беҙ хәҙер кемдеңдер ҡулы йә "итәге аҫтында" йәшәмәйбеҙ ҙә баһа! Ә мин барыбер татар телендә баҫылған "Һәфтиәк"те алмаясаҡмын. Татарса дини китаптарҙа хаталар тулып ята, уҡыһаң, иҫ китерлек!

Исламға ҡараған төшөнсәләр, Ҡөрьән-Кәрим һүҙҙәре дөрөҫ яҙылырға һәм әйтелергә тейеш. Хәҙерге дини китаптарҙа ғәрәп һүҙҙәрендәге өндәр йыш ҡына татар алфавитындағы хәрефтәр менән бирелеп, дөрөҫ уҡыу өсөн ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Ошо изге китап һүҙҙәрен дөрөҫ уҡымау үҙе лә ҙур гонаһ бит. Шуның өсөн минең татар телендә баҫылған дини китаптарҙы уҡығым килмәй. Ҡыҫҡаһы, әйтер һүҙем дә шул: "Беҙҙең республикабыҙҙа ҡасан башҡорт телендә дини китаптар баҫыла башлар икән? Башҡорт теленең дәүләт теле икәнен дә онотоп барабыҙ түгелме?"

Ошо һорауҙарға ыңғай яуап бирә алыусы табылырмы икән?

**Флүрә ИҪӘНҒОЛОВА.**

*✓Иң бөйөк маҡсат - ул Аллаһы Тәғәлә ризалығын алыр өсөн камиллыҡҡа ынтылыу. Кешеләр үҙ алдына етди рухи маҡсат ҡуя икән, ул маҡсатты бойомға ашырыр өсөн уларҙың дәрте гел өҫтәлеп тора.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# ҒАИЛӘНДЕ ДӨРӨҪ ҠОРА БЕЛҺӘҢ...

## камиллыҡҡа һәм Аллаһы ризалығына өлгәшерһең

### Эске донъяһы камил булмағандар күңел тыныслығы тапмай

Ғаилә бәхетле булһын өсөн ҡатын менән ирҙең билдәле бер әхлаҡи кимәлгә етеүе кәрәк. Ғаилә бәхете көнсөл, үсексән кешеләргә килмәй бит. "Һине уратып алған донъя - ул һин үҙең. Бер үҙең булған саҡта ни тиклем һиңә уңайлы, рәхәт - шул тиклем һиңә башҡалар менән дә рәхәт буласаҡ." Тимәк, үҙеңдең холҡоңдо камиллаштырыу - ғаилә бәхетенә тура юл.

### Күңелле бурыстар һәм аралашыу таҙалығы

Ғаилә - ул ваҡытлыса булған ауыр һанау түгел. Тиҙерәк ғаиләнән ҡотолоу сараһын эҙләгәндәр ҡалай бәхетһеҙ. Тормошта уңыш ҡаҙаныр өсөн ғаиләлә йәшәүҙең бер нисә ҡанунын белергә кәрәк. Улар араһында - үҙеңдең бурыстарыңды аныҡ ҡына белеү, бойомға ашырыу, тигәне бар. Иң мөһим ҡанун - ир менән ҡатындың бер-береһенә тоғролоғо. Ышаныу, ихласлыҡ - шул тоғролоҡтоң йоғонтоһо. Хыянат итеү вирусы ғаилә мөнәсәбәттәре өсөн ҡурҡыныс. "Гонаһлы мөхәббәт" (ғаиләнән тыш) - ул бысраҡлыҡ. Уға "ялған аҡса"ға ҡараған кеүек ҡарарға кәрәк. Сөнки ул "ғаилә кредитын юҡҡа сығара", "никах ихтыяжын юҡ итә". Ә ғаилә иһә дәүләт өсөн ныҡ ҡиммәтле нәмә.

### Балаларҙы хәстәрләү, йәки ни өсөн динозаврҙар юҡҡа сыҡҡан?

Динозаврҙар, ҙур йыртҡыс хайуандар, 100 миллион йыл элек Ер йөҙөндә йәшәгән, тиҙәр. Ни өсөндөр шунда уҡ юҡҡа сыҡҡандар. Быны аңлатыу гипотезалары араһында шундайы ла бар: динозаврҙар йомортҡаларын ҡомға күмгәндәр ҙә, буласаҡ балалары тураһында онотҡандар. "Бәләкәйерәк һәм аҡыллыраҡ булған йән эйәһе ошо йомортҡаларҙы табып, улар менән туҡлана башлаған, һәм, шулай итеп, динозаврҙар төр булараҡ юғала барған", тигән фараз йәшәй. Әгәр ысынлап та шулай икән, был динозаврҙарҙың шул тиклем көслө, ҙур булып та, балалары хаҡында уйламауҙарын, альтруист булмауҙарын, тимәк, төрҙө һаҡлап ҡалырға тырышмауҙарын күрһәтә.

Ә кеше үҙенең буласаҡ быуындарын хәстәрләмәһә, альтруизм күрһәтмәһә, кешелеккә ни булыр?

### Аң һәм әхлаҡ

Мәҙәни яҡтан үҫешкән, юғары белемгә эйә булған ғаилә ағзалары бер-береһен яҡшыраҡ аңларға тейеш, тигән фекер йөрөй. Ләкин тәжрибә күрһәтеүенсә, гел генә улай булмай, сөнки аңдын үҫешеүе әхлаҡи яҡтан үҫешеү менән бер түгел. Уға ҡарамаҫтан, аңдың булыуы изгелеккә ихтыяж тыуҙыра. Мәҫәлән, иң ябай микроорганизмдарҙың интеллекты юҡ. Ә хайуандарҙың, ҡоштарҙың аңы әҙ генә булһа ла үҫешкән, тимәк, уларҙа хис-тойғолар бар. Аҡҡоштар, мәҫәлән, айырылышыуҙы ауыр кисерә, ҡайғыра. Айыу, арыҫлан үҙ балаларын хәстәрләй. Ҙурайған филдәр, балаларын кемдер урлаһа, улар артынан ҡоллоҡҡа барырға әҙер.

Кешелә аң менән әхлаҡ бер тигеҙ үҫешергә тейеш. Мейе һуңғы яңылыҡтар менән тулһа ла, күңел буш булып ҡалырға мөмкин.

Кешелек аңлы булып та, әхлаҡле булырға өйрәнмәһә, бөтәбеҙгә лә юғалыу ҡурҡынысы янай. Быға атом бомбаһы асыҡ ишара, сөнки ул бер генә кешенең теләге менән бер секундта бөтә тереклекте юҡ итә ала.

### Ғаилә һәм йорт

Ғаилә бер ҡыйыҡ аҫтында көн күрә. Ә өй - шәхси урын, кешегә үҙ өйөндә рәхәт, уңайлы булырға тейеш. Ҡатын-ҡыҙ ғаилә усағының һаҡсыһы һанала. Хәҙер был һүҙ символик ҡына, ә элек ҡатын-ҡыҙ ысынлап та ашарға бешереп, ғаилә усағына һүнергә бирмәгән. Ир кеше яланда йөрөп, урманда һунар итеп йөрөгәндән һуң, өйгә ҡайтып ял иткән. Ир-егет өйҙә ял итә, ғаиләһе менән ихлас, тыныс, асыҡ була ала. Өй - ул ғаилә, бәхет, балалар көлөүе, шатлыҡ, ата-әсәләрҙең хәстәрлек урыны.

### Дөйөм мәнфәғәттәр, юғары маҡсаттар - ғаилә бәхетенең сере

Өйләнгәндәрҙең дөйөм маҡсаттары, теләктәре йәки ҡыҙыҡһыныуҙары булһа, был ғаиләне тағы ла нығыта. Кәләш менән кейәү камиллыҡҡа, белемгә табан бергә атлар өсөн ғаилә ҡорған икән, ғаилә тормошо күңелһеҙ түгел, сағыу, ҡыҙыҡлы, хатта мауыҡтырғыс буласаҡ. Иң бөйөк маҡсат - ул Аллаһы Тәғәлә ризалығын алыр өсөн камиллыҡҡа ынтылыу. Кешеләр үҙ алдына етди рухи маҡсат ҡуя икән, ул маҡсатты бойомға ашырыр өсөн уларҙың дәрте гел өҫтәлеп тора.

Ир менән ҡатын туғандарын хәстәрләһә, белеп, яҡшы итеп ата-әсә ролен үтәһә, уларҙың ғаилә мөнәсәбәттәрен миҫал итеп ҡуйып була. Тимәк, был ғаилә - ысын шәхестәр, юлдаштар берлеге. Ундай мөнәсәбәттәр бер-берендә ялҡытыуҙан йыраҡ, улар рухлы, тыныс.

Кешенең көсө камиллыҡҡа ынтылыуға йүнәлергә тейеш. Был донъялағы бөтә ғәмәлдәр ҙә кешегә икенсе донъяға миһырбанлы, камил булып барып баҫырға ярҙам итәсәк. Ғаилә бигерәк тә.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Һин йылмайһаң, бар донъя йылмайыр

"Аҫтыртын көлөүеңде туҡтат!" Ниндәй ҙә булһа эш боҙғаның өсөн бындай һүҙҙәрҙе ишеткәнең бармы? Был киҫәтеүгә һин лайыҡмылыр, юҡмы - быныһы мөһим түгел, әммә был һүҙҙәрҙе әйткән кеше "Йылмайыу йылмайыу тыуҙыра" тигән тормош ҡанунын яҡшы белә. Сыуаҡ көҙ кисендә янған усаҡ шикелле, йылмайыу кеше күңеленә яҡты оҫҡондай шатлыҡ тойғоһо тоҡандыра. Йылмайыу, әйтерһең дә, баҙлап яҡкан ҡуҙ шикелле, йылылыҡ һәм изгелек тойғоһо һирпеп, бөтә яманһыу уйҙарҙы үҙенә йолоп ала.

Ҡайһы саҡта хихылдау йәки ҡысҡырып көлөү урынһыҙ булһа ла, ысын күңелдән йылмайыу һәр ваҡыт кәрәкле. Ҡасан да булһа кешеләрҙең яҡтылыҡ һәм мөхәббәт булған ерҙә шатлыҡ кисермәгәнен иҫләйһеңме? Һәр кеше йылмайыу ярҙамында тормошҡа ошо мөһим сифаттарҙы индерергә һәләтле. Бер үк ваҡытта барыбыҙ ҙа бер тигеҙ шатланмаһаҡ та, һинең йылмайыуың донъяға бер аҙ йылылыҡ индереп, булмышыңдың яҡшы яғын күрһәтә ала. Ауыр тормош хәлдәренә йылмайып ҡарап, гармониялы ҡарарға алып килеүсе аңлау һәм һөйөү тойғоһо уятып була. Ул шулай уҡ һине уратып алған кешеләрҙе лә битараф ҡалдырмай. Һинең йылмайыуың, ҡайҙа ғына булыуыңа ҡарамаҫтан, барыһын да үҙгәртә ала!

Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, сырай һытып йөрөгәнгә ҡарағанда, йылмайғанда бит мускулдары әҙерәк тартыша. Ауыр мәлдәрҙә йылмая алыу - тимәк, тормошто һиңә яҡтылыҡ һәм һөйөү нуры бөркөрлөк итеп ҡабул итеү. Йылмайыу - шат күңелле кешенең йөҙ сағылышы: һин йылмайған саҡта, көсөргәнешле хәлдәр тәьҫир итеүенә ҡарамаҫтан, әлеге мәлдән кинәнес алып, һәм яҡшы кәйефең менән уртаҡлашырға әҙер булаһың. Әгәр һин тормошто еңел ҡабул итһәң, бойоғоп йөрөүгә киткән энергияны файҙалыраҡ маҡсаттарға тотона алаһың.

Бер туҡтауһыҙ иҫнәп, бойоғоп йәки йонсоп ултырған кеше янында үҙең дә һиҙмәҫтән уға ҡушылып иҫнәй башлаған осраҡтар булғаны бармы? Йәки булмаһа, һин күтәренке кәйеф менән йөрөгән саҡта балаларың ыҙғышып китте, ти. Уларҙың һәр береһе һине үҙен яҡлашырға тартҡылай һәм һин тиҙҙән улар кеүек ярһый башлайһың. Кемде күрә, шуның ҡиәфәтен ҡабатлаған зоопарктағы маймыл шикелле, беҙ ҙә бөтөнләй аңһыҙ рәүештә теге йәки был кешенең холҡон һәм тойғоларын үҙебеҙгә күсерәбеҙ. Бәхеткә күрә, бындай хәлдәрҙә ҡайһы юлды һайлау мөмкинлеге үҙебеҙҙең ихтыярҙа. Әгәр һин нисек кенә ҡыйын булғанда ла йылмайырға тырышаһың икән, үҙең дә һиҙмәҫтән, ауыр тойғоларҙан ҡотолоп, рәхәтлек кисереп, кәйефең күтәрелеп китеүен күрерһең. Әленән-әле күңелеңдәге нур һәм мөхәббәткә ҡағылаһың һәм уның менән уртаҡлашаһың икән, был донъя менән гармония булдырып, еңеп булмаҫтай сәбәп һәм эҙәрлекләү сылбырын өҙәсәкһең.

Һинең йылмайыуың тағы ла бик күп йылмайыуҙар тыуҙыра ала. Кире эмоцияларға ҡаршы торған йылмайыуың бөгөн бар донъялағы кешеләр тарафынан һиҙерлек йылмайыу була ала. Йә, бер генә йылмай әле. Бөтә донъя һинең йылмайыуыңа мохтаж бит.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

Әҙәпкә ғәҙәтләнһәң - әҙәм булырһың,
Яманға ғәҙәтләнһәң - әрәм булырһың.
(Башҡорт халыҡ мәҡәле)



## БАШ ЭШЛӘТМӘК




## Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ!

**2009 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзиткә яҙылыу тамамланып килә, тип хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ.**

**50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **294 һум 84 тингә**, **50673** индекслыһына (льготалыһына) **282 һум 66 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

- Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә матбуғат киоскыһында яҙылыу һеҙгә ярты йылға **240 һумға** төшәсәк.
- Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа уңайлы һәм арзан: ул һеҙгә ярты йылға **225 һумға** ғына төшәсәк.

**Артабан да бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер төйнәйек.**

Ф. СП-1

АБОНЕМЕНТ на газету

(индекс издания) 50665

Киске Өфө

Количество комплектов

на 2009 год по месяцам:

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | X | X | X | X | X | X |

Куда
(почтовый индекс)
Кому

Ф. СП-1

ДОСТАВОЧНАЯ КАРТОЧКА

ПВ | место | Литер

газету (индекс издания) 50665

Киске Өфө

| Каталожная цена | | Подписная цена | Количество комплектов |
|---|---|---|---|
| Местная цена | | 294.84 | |

на 2009 год по месяцам:

| 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | X | X | X | X | X | X |

Куда
(почтовый индекс)
Кому

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Беҙҙең ҡәҙерлеләребеҙ Ғафури районы Үзбәк ауылы һылыуы

**Римма Әнүәр ҡыҙы Рәхимова**

менән Кушнаренко районы Кушнаренко ауылы егете

**Айрат Сәғит улы Ғиләжевты**

ғүмерҙәренең иң иҫтәлекле мәле -

**законлы никахтары менән ихлас ҡотлайбыҙ.**

Айрат һәм Римма! Йәнде йәнгә, уйҙы уйға бәйләп, парлашып яңы тормош башлайһығыҙ. Ҡорған ғаиләгеҙ ырыҫлы, кистәрегеҙ айлы, уйҙарығыҙ яҡты, бәхетегеҙ ғүмерлек, мөхәббәтегеҙ мәңгелек булһын.

Һөйөүегеҙҙең ҡәҙерен белеп, һынауҙарға, айырлыҡтарға бирешмәй, берегеҙ өсөн берегеҙ тоғро йәр ҙә, таяныс һәм кәңәшсе лә булып, атай-әсәйҙәрегеҙҙе һөйөндөрөп кенә тороғоҙ. Күңелегеҙҙе һәр ваҡыт бәхет йондоҙо яҡтыртһын. Берегеҙ гүзәл йән, икенсегеҙ нурлы зат булып, яңы үрҙәргә талпынып йәшәгеҙ, һеҙҙең ғаиләусағы бер ҡасан да һүнмәһен, һөйөү уты һүрелмәһен.

Йәшлек мөхәббәте мәңге булһын,
Тик бер булһын барыр юлығыҙ.
Аҡ бәхеттәр генә яуып торһон,
Ҡотло булһын һеҙҙең туйығыҙ!

**Ҡотлау менән инәйегеҙ, атайығыҙ, әсәйегеҙ һәм туғандарығыҙ.**

* * *

Ошо арала тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - Ғәфури районы Сәйетбаба ауылынан **Риф Вәлиевты**, **М. Тузбековны**, Юлыҡ ауылынан **Миңзәлә Мәмәтҡолованы**, Яугилде ауылынан **Светлана Ғәлиәхмәтованы**, Хәйбулла районы Ивановка ҡасабаһынан **Рамазан Бикбовты**, Баҡал ауылынан **Айҙар Исәнъюловты**, Миәкә районы Ҡолтой-Ҡаран ауылынан **Фирүзә Ғәмиеваны**, Баймаҡ районы Йәрмөхәмәт ауылынан **Зөлфиә Мөьминованы**, Беренсе Этҡол ауылынан **Миңлегөл Моталлапованы**, **Даян Моталлаповты**, Яңғаҙы ауылынан **Гөлшат Аслаеваны**, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан **Хәсән Аскаровты**, Учалы ҡалаһынан **Зәлифә Төхвәтуллинаны**, Ишембай ҡалаһынан **Мәхмүт Килдебаевты**, Әбйәлил районы Байым ауылынан **Әнүәрә Хәйбуллинаны**, Йәнекәй ауылынан **Нәйлә Нафиковны**, Ишҡол ауылынан **Ринат Муллахмәтовты**, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан **Гөлдәр Әхмәтованы**, Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан **Рәшиҙә Ғәйнуллинаны**, Ишембай районы Ҡанаҡай ауылынан **Зөлфиә Баймөхәмәтованы**, Мәләүез районы Иштуған ауылынан **Т. Хәмзинды**, Белорет районы Инйәр ҡасабаһынан **Вил Солтановты ҡайнар ҡотлайбыҙ!**

Көн һайын бәләкәй генә булһа ла уңыштарға өлгәшеп, еңеүҙәр яулап, Хоҙай Тәғәлә мәрхәмәтәренә өлгәшеп, Уңыш һәм Бәхет ғәли йәнәптәре менән ҡулға-ҡул тотоношоп йәшәргә яҙһын!

**Изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ИҒТИБАР!

## "КОРАДО"...

**колорадо ҡуңыҙын юҡҡа сығара!**

Баҡсасылар өсөн колорадо ҡуңыҙы менән көрәш төп проблемаларҙың береһе булып ҡала. Был ҡороҡтос менән көрәшер өсөн баҡса үҫтереүселәр араһында киң билдәле "Корадо" препараты тәҡдим итәбеҙ.

- Ул колорадо ҡуңыҙҙарын 100 процентка юҡҡа сығара. Препаратҡа бирешмәгән ҡуңыҙ төрҙәре юҡ.
- "Корадо" препаратын һиптергәндән һуң, картуф үҫентеһендә 3-4 аҙна колорадо ҡуңыҙҙары бөтөнләй үрсемәй, шуға ла картуфты бер тапҡыр ғына эшкәртеү ҙә етә. Препараттың һыңғай яғы шунда: ул картуф бүлбеләренә үтеп инмәй һәм унда йыйылмай.
- "Корадо" бөтә һауа шарттарында ла яҡшы эшләй, ул йәйге эҫелә лә, ҡойма ямғырҙа ла үҙенсәлектәрен юғалтмай. 1 сутый ерҙе эшкәртеү өсөн 10 литр һыуға 1 мл препарат етә.
- "Корадо" колорадо ҡуңыҙын юҡҡа сығарып ҡына ҡалмай, ә баҡсасылар өсөн яҡшы таныш булған, ағастарға, ҡыуаҡлыҡтарға һәм баҡса сәскәләренә зыян килтереүсе бетсәләрҙе лә үлтерә. Үҙ ваҡытында сифатлы итеп ағастарҙы һәм сәскәләрҙе бер тапҡыр эшкәртеү етә.

"Корадо" бик уникаль препарат. Уны магазиндарҙа һәм баҙарҙарҙа һатып алырға була. Тауар сертификатланған.

✓*Үҙҙәре ышанып етмәһә лә һинең турала гел насарҙы һөйләгән, һине күрә алмаған дошмандар һәм һинең турала бар яҡшыны белеп тә бер һүҙ ҙә әйтмәгән дуҫтар араһында нисек йәшәмәк кәрәк?! (А. Ривароль).*



АФАРИН!

# ЭШҺЕҘЛЕК БУЙЫНСА ПОСОБИЕҒА...

## эшҡыуарлыҡ мәктәбе

**Ошо көндәрҙә Өфөлә "Латифа" исемле башҡорт балалар художество студияһы үҙ ишектәрен асты. Уның ойоштороусыһы һәм етәксеһе Эльза Ҡотлобаева республикала беренселәрҙән булып бизнес-планын яҡлап сыкты һәм хеҙмәт баҙарында көсөргәнеште кәметеүгә йүнәлтелгән яңы федераль программа сиктәрендә үҙ эшен асып ебәрҙе.**



- Был проекттың маҡсаты эш менән тәьмин итеү үҙәгендә иҫәптә торған һәм үҙ эшен ойоштороға теләгән кешегә дәүләт тарафынан эшһеҙлек буйынса түләнгән пособиеның бер йыллыҡ күләмен бер тапҡыр ҡайтарып биреүгә йүнәлтелгән, - ти Киров районының халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгенең эшкә урынлаштырыу бүлеге начальнигы Зинаида Степанова. - Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең һуңғы ҡарарына ярашлы, хәҙер пособие күләменең 12 тапҡыр ҡабатланышы иң юғары күләмдә иҫәпләнәсәк һәм буласаҡ эшҡыуарҙың компенсация суммаһы 60 мең тирәһе тәшкил итәсәк. Зинаида Степанова һөйләүенсә, был сумманы тик үҙ эшендә асыуға ғына тотонорға мөмкин.

- Был студияны асыу күптәнге хыялым ине, - тип һөйләп китте Эльза Ҡотлобаева. - Нисек кенә сәйер яңғырамаһын, быға донъя финанс көрсөгө этәргес көс булды. Мин телевидениела компьютер графикаһы рәссамы булып эшләп йөрөй инем, аҙаҡ халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгендә иҫәптә торҙом. Унда үҙ эшемдә асыу ниәте менән мөрәжәғәт иттем һәм бер ваҡыт бизнес менән шөғөлләнергә теләүселәр өсөн курстар үткәрелеүе тураһында иғлан күреп ҡалдым. Лекцияларҙы беҙгә юристар, иктисадсылар, эшҡыуарҙар һөйләне һәм ике аҙна үтеүгә, мин дөрөҫ итеп бизнес-план төҙөргә өйрәндем, һалымдар системаһын үҙләштерҙем. Бының бер ниндәй ҙә ҡыйынлығы булмауын аңланым. Планды үҙем төҙөнөм. Маҡсатыңды аныҡ билдәләгәндә барыһына ла өлгәшергә була икән.

Эльза Ҡотлобаева Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге Республика художество гимназия-интернатынан һуң Өфө сәнғәт училищеһының дизайнер факультетын, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетын тамамлаған. Бөгөн ул һөнәри оҫталығын камиллаштырыуын дауам итеп, Башҡортостандың халыҡ рәссамы Зөфәр Ғаяновтан дәрестәр ала.

- Бизнес-планымды яҡлағанға тиклем үк үҙ эшемде асыу өҫтөндә эш башлағайным инде, - тип һүҙен дауам итә Эльза. - Мин Һамарҙан килгән танышыма шул тиклем рәхмәтлемен. Ул асфальтта һүрәт төшөрөү менән шөғөлләнә. Бер ваҡыт ул үҙенең нисек эшләгәнен ҡарарға мине лә саҡырҙы. Мин был күренешкә ҡарап иҫем китте: унын тирәләй балалар уратып алған һәм улар ҙа асфальтта төрлө һүрәттәр төшөрә ине. Минә был идея бик оҡшап ҡалды.

"Латифа" студияһы ғәҙәти биш ҡатлы йортта урынлашҡан. Эльза үҙ фатирын үҙгәртеп, студия өсөн ҙур бүлмәне һәм кухняны берләштергән һәм уҡыу класы булдырған, ә бәләкәй бүлмәһен үҙенә йәшәү өсөн ҡалдырған. Студияны үҙе төшөргән картиналар һәм ҡурсактар менән биҙәгән, ҙур көҙгө ҡуйған.

- Был бизнес ойоштороуҙың көнбайыш варианты. Рәсәйҙә бындай тәжрибә киң таралмаған әле, - ти студия етәксеһе эштең айышына төшөндөрөп. - Минең үҙ фатирым булыуы күп нәмәнән ҡотҡарҙы, юғиһә, минең кеүек йәштәгеләрҙең фатиры ла юҡ бит.

Студияға биш йәштәге балаларҙан алып, йәш сикләүенә ҡарамайынса, барыһы ла, хатта пенсионерҙар ҙа килә ала. Иртәнге сәғәттәрҙә балалар менән, киске ваҡытта ололар менән шөғөлләнергә уйлайым. Дәрестәр нисек дөрөҫ итеп бумала, ҡәләм тотоп, һыҙырға өйрәнеүҙән башланасаҡ.

**Шулай итеп...**

**Был проекттың төп бурысы һүрәт төшөрөргә теләүселәрҙә ижади һәләтте асыуға булышлыҡ итеүгә, эстетик зауыҡ һәм сәнғәткә һөйөү тәрбиәләүгә ҡайтып ҡала. Дәрестәрҙә төп иғтибар биҙәү-ғәмәли сәнғәттә, Башҡортостандың профессиональ рәсем сәнғәтенә нигеҙ һалыусылар ижадында һәм дөйөм башҡорт һынлы сәнғәт мәктәбендә сағылыш тапҡан башҡорт халҡының мәҙәни һәм тарихи нигеҙҙәрен өйрәнеүгә йүнәлтеләсәк. Бөтөн художестволы мәктәп һәм студияларҙан айырмалы рәүештә, Эльза Ҡотлобаева үҙ студияһында башҡорт телендә аралашҡан балалар өсөн айырым төркөм ойошторорға уйлай. Был балалар үҙ телендә уҡый алһын һәм профессиональ терминдарҙың башҡортса аталышын белһен, тигән маҡсаттан сығып эшләнә.**

**Олеся СЕРЕГИНА. "БАШвестЪ".**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ВАҠ-ТӨЙӘККӘ...

## ваҡыт әрәм итмә

Яҡынға ҡыҙ бирһәң - тоҡ-тоҡ хәбәр килер, ҡырға ҡыҙ бирһәң - тоҡ-тоҡ кҫтәнәс килер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙҙәре ышанып етмәһә лә һинең турала гел насарҙы һөйләгән, һине күрә алмаған дошмандар һәм һинең турала бар яҡшыны белеп тә бер һүҙ ҙә әйтмәгән дуҫтар араһында нисек йәшәмәк кәрәк?!

**(А. Ривароль).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Фәлсәфә профессоры аудитория алдында тороп, биш литрлы һауыт ала һәм уны өс сантиметрҙан бәләкәй булмаған таштар менән тултыра. Һуңынан студенттарҙан һорай: "Һауыт тулымы?" "Тулы", - тип яуап бирә йәштәр.**

**Профессор шул уҡ һауытҡа борсаҡ һала. Борсаҡ таштар араһындағы бушлыҡты тултыра. Һуңынан һорай: "Һауыт тулымы?" "Тулы", - тип яуаплай тағы ла бирә йәштәр.**

**Профессор ҙур йәшник алып, эсендәге ҡомдо һауытҡа түңкәрә. Әлбиттә, ҡом бушлыҡты бөтөнләй ябып ҡуя. Тағы шул уҡ һорау яңғырай: "Һауыт тулымы?" "Тулы, хәҙер инде туп-тулы", - тип яуап бирә йәштәр.**

**Шунан профессор өҫтәл аҫтынан һыу ала ла, уны һауытҡа ағыҙа.**

**Студенттар араһында көлөү яңғырай.**

**- Ә хәҙер минең шуны аңлатҡым килә, - тип дауам итә профессор. - Һауыт - ул һеҙҙең ғүмерегеҙ. Таштар - ғүмерегеҙҙең иң ҡиммәтле, кәрәкле нәмәләре: ғаилә, сәләмәтлек, дуҫтар, балалар - бөтә нәмәне юғалтҡан хәлдә лә, был "таштар" һеҙҙең тормошто барыбер тулы итеп торасаҡ. Борсаҡ - ул бары тик үҙең өсөн генә ҡиммәткә эйә булған нәмәләр: эш, өй, машина. Ҡом - ул ваҡ-төйәк әйберҙәр.**

**Әгәр ҙә һауытты тәүҙән уҡ ҡом менән тултырһаң, таш, борсаҡтар өсөн урын ҡалмаясаҡ. Тимәк, ваҡ-төйәккә ваҡытты әрәм итһәң, мөһим әйберҙәр өсөн урын ҡалмаясаҡ. Бәхет килтергән нәмәләр менән шөғөлләнегеҙ: балалар менән уйнау, тормош иптәшең менән ваҡыт үткәреү, дуҫтар менән осрашыуҙар - барыһы ла ысын бәхет сығанаҡтары. Эшләү, өй йыйыштырыу, машинаны йүнәтеү, йыуыу өсөн гел ваҡыт табыласаҡ. Иң элек таштарҙы хәстәрләгеҙ, мөһим нәмәләрҙе уйлағыҙ, ҡалғандары бары тик ҡом ғына ул.**

**Шул ваҡыт бер студент ҡулын күтәреп, шулай тип һорай:**

**- Ә һыуҙың бында ни ҡыҫылышы бар?**

**- Бик шәп һорау. Ни өсөн һауытты һыу менән тултырҙым һуң? Һауыт тулы булһа ла, һыу өсөн урын етте. Тимәк, ғүмерегеҙ нисек кенә тулы булмаһын, ялҡаулыҡ өсөн дә урын табылыр..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәррирләт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6159
Заказ 2489